✔ *Бер аҡһаҡал уҡыусыларына былай тигән: "Был донъяла кешелектең иғтибарынан ситтә торған, өйрәнелмәгән бер генә нәмә лә ҡалманы: тауҙар һәм далалар, диңгеҙҙәр һәм йылғалар, сүллектәр һәм мәңгелек боҙлоҡтар - барыһы ла тәфсирләп карталарға индерелеп бөттө. Кеше йыһанға һәм ҡитғалар төпкөлөнә лә үтеп инеп, күҙ һала. Әммә уның үҙ күңеленә күҙ һалырға һаман ҡыйыулығы етмәй... "*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4 - 10
ФЕВРАЛЬ
(ШАҠАЙ)
2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№5 (475)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Баш ҡаланың... милли йөҙө бармы?



4-5

Ер алайыҡ та... өй һалайыҡ!



6-7

Итәк ҡырҡып ең ямайбыҙмы?





8-9 Ә итәк бөтһә, ни эшләрбеҙ һуң?

Бәйғәмбәрҙең йорто



12-13

14 ТВ-программа


ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# БЕҘҘЕҢ КИЛӘСӘК...

## балалар һәм ғаилә именлегенә бәйле



**Бына бер нисә йыл инде республикала һәр тыуған яңы йыл тормошобоҙҙа гәйәт ҙур әһәмиәткә эйә бер өлкәгә, тармаҡҡа, мәсьәләгә арнала. Быйылғыһы иһә Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип нарыҡланасаҡ. БР Президенты Рөстәм Хәмитов ошо хаҡтағы Указға ҡул ҡуйҙы.**

Эйе, Башҡортостанда быйылғы йылдың Имен бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы тип нарыҡланыуы бик урынлы булыр. Башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда беҙҙә демографик хәл бер аҙ яҡшыра, йәғни 2000 йылдан башлап балалар күберәк тыуа, шулай уҡ уртаса ғүмер оҙайлығы 2010 йылда 69,7 йәшкә тиклем артты, тип маҡтанабыҙ. Ләкин был күрһәткестәр тынысланырға сәбәп түгел. Дәүләтебеҙ хәстәрлегән сағылдырған яңынан-яңы проекттар, указдар, күрһәтмәләр зарурлығы бар, уларҙың ыңғай һөҙөмтәләрен күреп, белеп торабыҙ. Мәҫәлән, әгәр ҙә Рәсәйҙә былтыр 2005 йыл менән сағыштырғанда тыуым 21 процентҡа артҡан икән, был Әсәлек капиталының, "Сәләмәтлек" милли проектының һөҙөмтәһе бит инде.

Әммә был өлкәгә һалынған капитал, был өлкә тураһындағы хәстәрлек көн дә дауам итергә тейеш. "Киләсәк быуындар тураһында ҡайғыртыу - иң ышаныслы, иң аҡыллы һәм изгелекле инвестиция ул. Балалар хоҡуҡтары яҡланған, уның кешелек дәрәжәһе хөрмәт ителгән йәмғиәт үҙе лә изгелекле һәм кешелекле, шул уҡ ваҡытта ул яҡшыраҡ та үҫешә, киләсәге лә асыҡ төҫмөрләнә", - тигән аҡыллы һүҙҙәр әйткәйне Рәсәй Президенты Д. Медведев бер сығышында. Ошо аҡыллы һүҙҙәрҙе һәр кимәлдәге етәкселәрҙең, иң мөһиме, һәр граждандың аңлауы зарур. Шунһыҙ киләсәк тормошобоҙҙа ишереләсәк һынауҙарҙы иңебеҙ күтәрә алмауы ла мөмкин бит. Ишетә йөрөйһөгөҙҙөр, яҡындағы 15 йыл эсендә 90-сы йылдарҙағы рухи төшөнкөлөк, иҡтисади, социаль, демографик көрсөктөң әҙемтәләре үҙен белдерәсәк. Бигерәк тә бала табыу йәшендәге ҡатын-ҡыҙҙар һаны аҙыраҡ булыуы демографик хәүефте арттырасаҡ. Бына шундай хәүеф-хәтәрҙәрҙе үткәреп ебәреү зарурлығы ла талап итә бит ғаилә, әсәлек, балалыҡ мәсьәләләренә капитал һалыуҙы, был өлкәгә бар йәмәғәтселектең, бар кимәлдәге етәкселәрҙең иғтибарын йүнәлтеүҙе.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

АФАРИН!

# ИШЕМБАЙ ШАШКАСЫЛАРЫ...

## тағы донъяны яулай



**Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 7-се синыф уҡыусыһы Руфина Әйүпова Рәсәй йыйылма командаһы составында Белоруссияның Слоним ҡалаһында мини-кадеттар араһында үткән шашка буйынса донъя беренселегендә алтын миҙал яуланы.**

Руфина шашкалар менән 6 йәштән шөғөлләнә. Шашка түңәрәгенә ул беренсе тапҡыр Регина апаһы менән килә. Тәүге тренеры Ирек Ғәтиәтуллин чемпионды шашка серҙәренә өйрәтә лә инде. Бөгөнгө көндә Руфина шашкалар буйынса олимпия резервында Ишембай балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе уҡытыусыһы Владимир Мильшин төркөмөндә шөғөлләнә. 12 генә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ҡыҙҙың был спорт төрөндә яулаған уңыштары байтаҡ, ә Белоруссияның Слоним ҡалаһында үткән донъя беренселендәге был еңеүе - иң ҙуры.

Ярыштарҙа Монголия, Ҡытай, Украина, Латвия, Үзбәкстан, Польша һәм башҡа илдәрҙән үҫмерҙәр ҡатнаша.

- Дүрт ҡыҙ бер төрлө мәрәй йыйҙыҡ, әммә коэффициент буйынса мин еңеүсе булдым, - ти Руфина.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Шашкаларҙың интеллектуаль үҫеш өсөн файҙаһын күҙ уңында тотоп, быйыл БР-ҙың Ҡатын-ҡыҙҙар парламент клубы республиканың шашкалар федерацияһы менән берлектә мәктәптәрҙә шашка спортын үҫтереү буйынса проектты тормошҡа ашыра башланы. Ишембай шашка мәктәбе, шул иҫәптән, 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатының шашканы үҫтереү тәжрибәһен таратыу уның нигеҙен тәшкил итә. Был чемпиондар әҙерләү өсөн генә түгел, белемле балалар тәрбиәләү өсөн дә кәрәк.**

**Рәсимә ФӘТҠУЛЛИНА.**

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# БАЛАНДЫ МИНДӘ ҠАЛДЫР...



**Ҡатын-ҡыҙҙың иң ҙур бәхете - әсә булыуҙа икәнлекте инҡар итеүсе табылмаҫ, тип уйлайым. Ҡайһы берәүҙәрҙең "карьера", "әле ваҡыт етмәгән" һәм башҡа төрлө сәбәптәр табып, ошо бәхеткә өлгәшеүгә үҙҙәренә юл ябыуын күреү ҡыҙғаныс. Әлбиттә, мин бала бағыуға ҡамасаулаған ниндәйҙер етди сәбәптәр хаҡында һүҙ алып бармайым, ә "уйлап сығарылған"дарын ғына билдәләйем.**

Гәзиттә даими сыға килгән "Әйҙәгеҙ, аҡса эшләйек!" рубрикаһын ҡыҙыҡһынып күҙәтеп барам һәм үҙемдең дә ғаиләмә бер аҙ аҡса килтергән эшмәкәрлегем хаҡында бәйән итмәксемен. Балалар баҡсаһына сират етмәү сәбәпле, эшкә сыҡмайынса, әлеге көндә бала менән өйҙә ултырам. Бала ҡараусы яллау, беренсенән, ҡиммәткә төшә һәм көс-хәл менән эшләп тапҡан эш хаҡының күбеһен тиерлек "ашай". Икенсенән, улымдың мине тәүлегенә бер-ике сәғәт кенә күрергә тейешле перспективаһы ла күңелгә ятмай. Шулай итеп, Тимурҙың "балалар баҡсаһы" - өй, ә тәрбиәсеһе - мин.

Балалар баҡсаһы мәсьәләһен мин белгәне генә лә унлап ғаилә хәл итә алмай аҙаплана. Баланың тәүлек әйләнәһенә янында булыуы ҡыуаныслы хәл булһа ла, ҡайһы саҡта тиҙ арала хәл итәһе мәсьәләләр килеп тыуа, ә бала менән ҡала буйлап йәмәғәт транспортында йөрөү мәшәҡәтле лә, ауыр ҙа. Нәҡ ошо саҡта дуҫтар, таныштар минең хеҙмәтем менән файҙалана, йәғни бер-нисә сәғәткә йәки ярты көнгә балаларын миндә ҡалдыра һәм тыныс күңел менән үҙ эштәрен теүәлләй. Миңә лә һәйбәт, сөнки был хеҙмәт өсөн күпмелер аҡса түләйҙәр, уларға ла уңайлы, сөнки бала ышаныслы ҡулдарҙа ҡала, ҡараулы һәм яҡлаулы.

Шул ғына хеҙмәт өсөн аҡса алырға оят түгелме, тип әйтеүселәр ҙә булыр. Һис тә оят түгел, сөнки һәр хеҙмәт түләнергә тейеш һәм бында дуҫлыҡ-танышлыҡ ептәрен ситкә алып тороу отошлораҡ, тип һанайым. Был хәҡиҡәтте барыһы ла аңлап, үпкә һүҙҙәрен белдермәйенсә, бер-береһен аңлап эш итһә, ике яҡҡа ла отошло партнерлыҡ урынлашасаҡ һәм һәр һуны ҡәҙерле булған йәш ғаиләгә ярҙам да буласаҡ.

**Рәзилә ХИЛАЛОВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# БИРГӘН ҺАБАҠТАРЫ ҒҮМЕРЛЕК...




**"Киске Өфө"нөң сыға башлауына ла 10 йыл булып киткән икән. Тиҫтә йыл эсендә был баҫманан алған аҡылды, тормош һабаҡтарын ғүмерем эсендә лә алмағанымдыр, тип уйлап ҡуям. Аҡылы, аңы булмаған кеше "Киске Өфө"нө уҡымай ҙа инде, тим.**

Ысынлап та, шундай яҡты гәзит бит ул "Киске Өфө". Бәләкәй саҡта атай-әсәйҙәр күп китап уҡығанға асыулана торғайнылар. Ул ваҡытта китап уҡыуҙың ләззәтен аңлатырға телем зәғиф булғандыр, күрәһең. Хәҙер быуна "Киске Өфө"нән айырылып булмай, уны уҡыу тәмле ризыҡ ашаған кеүек бит. Гәзит килеү менән уны бер тынала уҡып сығам да, аҙаҡтан тәмләп, аҡрынлап тағы уҡыйым. Беҙҙең халыҡта шундай аҡыллы, зыялы геройҙар, авторҙар булғанына һөйөнөсөмдөң иге-сиге юҡ. Бөтә хеҙмәткәрҙәргә, авторҙарға рәхмәт.

**Ғәлимә ҒӘЛИЕВА.**
**Илеш районы Үрге Йәркәй ауылы.**

# БАРЛЫҠ ҺОРАУҘАРҒА ЯУАБЫ ӘҘЕР...

**"Киске Өфө" гәзитен алдырыуыбыҙға инде байтаҡ йылдар булып китте. Уның һәр һанын көтөп алам, ғаиләбеҙ менән уҡып сыҡҡас, эшемә алып барып, хеҙмәттәштәремә уҡытам. Аҙаҡ бер һанын да юғалтмай, барыһын бергә төпләп тегеп ҡуям.**

Тормошта бит бик күп проблемаларға, үҙеңде борсоған әллә күпме һорауҙарға юлығып тораһың. Ошо донъяуи мәсьәләләргә яуап биргәне, шулай уҡ сәйәси темаларҙы ла сағылдырғаны өсөн "Киске Өфө" гәзите төпләмәһе гел ҡул аҫтымда ята. Төплө аҡыллы, белемле, фекерләй белгән кешеләр менән үткән диалогтар, монолог, әңгәмәләр бик фәһемле. Ғөмүмән, гәзитте мин тотошлай, һәр битен яратам.

Тағы шуға иғтибар итәм: "Киске Өфө"лә күтәрелгән тема эҙмә-эҙлекле дауам итә. Халҡыбыҙ өсөн хәл иткес ваҡиғалар, уның киләсәгенә йоғонто яһарлыҡ, милли идея булырлыҡ фекерҙәр, тағы ла үҫтерелеп, байытылып, ҡайта-ҡайта баҫыла. Был бик матур бер ғәҙәте гәзиттең. Шуныһы менән "Киске Өфө" күңелдә арбай ҙа инде ул.

**Алһыу ҒӘЗИНА.**
**Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылы.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




Ҡариҙел районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Һеҙҙе бер аҙ дәртләндереү өсөн шундай тәкдим: февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Көрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныштоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, марттан өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - 232 һум 16 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең электрон почта: **info@kiske-ufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**, беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**, блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалаштырыуға булышлыҡ итеү фонды Башҡортостанға граждандарҙы авария хәлендәге йорттарҙан яңыһына күсереүгә финанс ярҙамы бирергә ҡарар итте. Фонд идараһы уны бер ай эсендә ҡарарға тейеш. Башҡортостан Фондтан 12,21 млн һум алырға планлаштыра. Был аҡсаны граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡтан аҙ ҡатлы йорттарға күсереүгә тотоноу өсөн Баймаҡ ҡалаһы һәм Ауырғазы районына бүлеү күҙаллана.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте һәм Ауыл хужалығы министрлығы Германияла үткән "Йәшел аҙна-2012" күргәҙмәһендә тәкдим ителгән продукцияның киң ассортименты һәм юғары сифаты өсөн" махсус призы менән, Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия ғилми-тикшеренеү үҙәге, "Башспирт" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, "Бәләбәй һөт заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте, Башҡорт дәүләт аграр университетының ҡортсолоҡ кафедраһы күргәҙмәнең иҫтәлекле миҙалдары менән бүләкләнде.

✓Республикала "Комдив Шайморатов. Геройҙың ҡайтыуы" тигән акция ойошторолдо. Уның маҡсаты - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал Миңлеғәле Шаймоператовка "Рәсәй Геройы" исемен биреүгә өлгәшеп, тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү. Акция инициаторҙары республика муниципалитеттарына һәм дәүләт власы органдарына был проекты хуплауҙы һорап хаттар ебәрҙе. Был проектты хуплаған ҡултамғалар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында туплана. Адресы: 450095, Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27. Телефондар: (347) 227-52-02, 227-47-57.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов предприятиеларҙың финанс хәлен яҡшыртыу һәм уларҙың банкротлығы өлкәһендәге эшмәкәрлектең һөҙөмтәлелеген арттырыу буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, килемле предприятиелар һаны буйынса республика Рәсәй Федерацияһында беренсе урында тора: республика предприятиеларының 80 проценттан ашыуы килемле эшләй. Шул уҡ ваҡытта төбәк банкротка әйләнеүсе предприятиелар һаны буйынса ла илдә беренсе урындарҙың береһен биләй. Президент фекеренсә, банкротлыҡ бик ҡулай "бизнес"ка әүерелде. Арбитраж идарасылар предприятиеларҙы тергеҙеү яҡлы түгел. Ошоларҙы хәл иткәндә, предприятиеларҙың финанс хәлен яҡшыртыу өлкәһендә алға китеш буласаҡ, тигән һығымтаға килде ултырышта ҡатнашыусылар.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ХӘҠИҠӘТ ЙӘН ҺАҠЛАР...

**Ысынлап та, үлемдең аръяғында ниҙәр бар һуң? Теге донъямы? Бушлыҡмы? Ҡараңғылыҡмы? Яҡтылыҡмы? Тамуҡмы? Ожмахмы? Ошоларҙың береһе хаҡ булһа, унда кем булған да, донъялыҡҡа ҡайтып, кемгә ошо хаҡта һөйләгән? Был һорауҙар ошоғаса кешелек алдында торған иң ҙур һорау булып торҙо. Кешеләр уларға яуапты, ниндәй дин тотоуҙарына ҡарап, яуабын да таба. Улар хаҡында иҫ белгәндән алып мин дә уйланам. Майкл Ньютондың "Йән сәйәхәте" тигән китабын уҡығанға тиклем үлемдең теге яғы миңә ҡараңғылыҡ һымаҡ тойола ине. Ул китапты уҡырға миңә билдәле шағир һәм публицист Тимер ағай Ниәтшин тәҡдим итте.**



## Күҙҙәр күңел көҙгөһөмө?

Көҙгөгә ҡараған саҡта ни өсөн кеше үҙен оҡшатмай, башлыса йөҙ төҙөлөшөнөң кәмселектәрен генә күрә һуң? Үҙенең көҙгөләге сағылышына тулыһынса риза булғандар йөҙгә берәү, икәү генә, тиҙәр. Ә һеҙ ошо хаҡта уйланғанығыҙ бармы? Был хәлгә яуапты урыҫтарҙың "Глаза - зеркало души" тигән әйтемен ҡулланып эҙләп ҡарайыҡ. Беҙ был әйтемде механик рәүештә "Күҙҙәр - күңел көҙгөһө" тип тәржемә итәбеҙ. Дөрөҫ, күңел торошо күҙҙәрҙә сағылыш таба инде ул. Әммә "душа" һүҙенең тағы бер мәғәнәһе йәндә аңлата. Тимәк, урыҫ әйтеменең "Күҙҙәр - йән көҙгөһө" тигән варианты ла бар һәм тап ошоноһо хәҡиҡәткә яҡынырак кеүек.

Майкл Ньютон аңлатыуынса, йән үлемһеҙ һәм ул ғүмерҙән ғүмергә күсеп йөрөгән осраҡта үҙенең артынан күҙ ҡараштарын да эйәртеп алып йөрөй. Күҙҙәрҙең формаһын да, төҫөн дә түгел, нәҡ ҡараштарҙы эйәртә йән үҙенең артынан. Бына шуның өсөн дә кеше көҙгөгә ҡараған һайын иң тәүҙә үҙенең кәмселеген күрә. Был осраҡта йән ҡарашына уйылған хәтер быға тиклемге үҙенең эйәһе менән әлегеһе араһындағы айырмалыҡты күрә һәм элекке үҙен таный алмауы арҡаһында үҙенә үҙен оҡшатмайынса, ятһынып бағa.

Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар бер үк һанда булған бер бүлмәгә көҙгө һәм видеокамера ҡуйғандар. Һуңынан яҙманы ҡараһалар, ир-аттар күберәк көҙгөгә күҙ һалған. Ә бына ни өсөн ир-ат күберәк көҙгөгә ҡараусан һуң? Атаҡлы ғалим, антрополог Ринат Йосопов иҫбатлауынса, ирҙәр генетик код мәғлүмәтен йөрөтмәй, быға ҡатын-ҡыҙҙар эйә. Шуға күрә ир-атҡа үҙ-үҙен иҫбатлар, үҙбилдәләнешкә хоҡуғын нығытыр өсөн туҡтауһыҙ рәүештә үҙҙәре менән һоҡланып торорға кәрәк. Тимәк, ир-атта үҙ йөҙөн, һынһыпатын онотмаҫҡа тырышыу ихтыяжы һәр ваҡыт йәшәй булып сыға. Ә ҡатын-ҡыҙҙар, ундай генетик кодҡа эйә булғас, йәғни ҡараштарына йән асылы нығырaҡ уйылғас, былдай ихтыяжды тоймай. Ҡатын-ҡыҙ көҙгөгә буяныу, йәғни йөҙөн үҙгәртеү ихтыяжы тыуғанда ғына ҡарай. Ғөмүмән, нинә улар буяна һуң? Сөнки был осраҡта ҡатын-ҡыҙ үҙенең әлеге йөҙ һынланышын йәненең элекке эйәләренекенә тап килтерергә тырыша. Ә беҙ, бер ҡатлы ир-аттар, уларҙың был ғәмәлен "беҙгә оҡшарға тырышалар" тип уйлап, хаталанабыҙ. Улар беҙгә түгел, ә йөҙҙәрен үткән быуат ир-азаматына, батыр яугиргә йә батшаға оҡшар өсөн буяй, баҙыян бөркә, кершән яға. Тап шул саҡтағы һөйгәненә йөҙә менән тап килер өсөн атҡара был ғәмәлде. Иң ҡыҙығы шунда: ҡатын-ҡыҙ быны үҙе лә аңламай башҡара, бары тик күҙ ҡарашы менән аҫҡы аңы бәйләнеше һәҙәмтәһендә барлыҡҡа килгән бойороҡто ғына ошо рәүешле үтәй.

Ә һеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар, ошо хәлдең хәҡиҡәт икәнен аңларға һәм быға инанырға теләһәгеҙ, Америка философы һәм психологы Майкл Ньютондың "Йән сәйәхәте" тип аталған донъяла киң билдәлелек яулаған китабын уҡығыҙ. Кемегеҙ Интернет менән эш итә, ошо юлдарҙы уҡығас, бер минуттан һуң был китапты уҡый башларға мөмкинһегеҙ. Бының өсөн "Майкл Ньютон "Путешествие души" тип яҙыуығыҙ ғына етә.

## Йән хәтере

"Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." әйтеме менән был китапта яҙылғандарҙың ниндәй уртаҡлығы бар, тип әйтер берәү. Бар шул. Сөнки йән "теге тараф" менән бәйләнеште аҫҡы аң аша тормошҡа ашыра. Беҙ, кешеләр, аңдың һәм техник прогрестың үҫешен, дәүләттәрҙең барлыҡҡа килеүен, милләттәрҙең көнитмеш мәсьәләләрен, шәхес-ара, милләт-ара, дәүләт-ара мөнәсәбәттәрҙең, ғөмүмән, йәшәйешкә бәйле һәр мәсьәләне - барыһын да донъялыҡтағы махсус органдар, дәүләт, хөкүмәт, суд, прокуратура һәм башҡа хеҙмәттәр көйләй, тип төптө яңылышабыҙ. Барлыҡ мәсьәләләр "теге тарафта" хәл ителә. Ул тарафты икенсе төрлө итеп әйткәндә, абсолют хәҡиҡәт, рухтар йә йәндәр иле, бер һуҙ менән, Аллаһы Тәғәлә, тип атайбыҙ. Донъялыҡҡа һәр кем ниндәйҙер һынау үтер өсөн килә: әйтәйек, хакимдар йәнде - власть, уларға буйһоноусыларҙы ҡоллоҡ менән һынар өсөн ебәрелә. Әгәр ҙә кеше үҙ ғүмерендә бер ҡыҙҙы көсләһә, икенсе тапҡыр ергә ҡыҙ итеп ебәрелә. Ул ҡыҙҙы нисек көсләгән булһа, үҙен дә көсләйҙәр һәм рухтар иленә әйләнеп ҡайтҡандан һуң ул үҙенең хатаһын таныуын белдерә һәм артабанғы кеше ғүмерендә был һуҙенә тоғролоғон иҫбат итһә, бер кимәлгә күтәрелә.

Майкл Ньютон пациенттарынан йәндәрҙең элек йәшәгән кешеләге кисерешe хаҡында һөйләтер өсөн уларҙы регрессив гипноз хәлено килтереп, уларға төрлө һорауҙар биреп, ҡыҙыҡлы эңгәмәләр ҡора. Шуныһы мөһим: был әңгәмәләрҙе әҙәби әҫәр яҙғандағы һымаҡ уйлап сығарып яҙыу бөтөнләй мөмкин түгел. Ни өсөн тигәндә, Ньютон бер пациентын гипноз хәленә килтереп, уның үткән тормошонда тик уға ғына мәғлүм булған мәғлүмәтте йә ниндәйҙер хәл-ваҡиға тураһындағы хәбәрҙе шуларға мөнәсәбәтле йә шаһиты булған икенсе берәүҙән дә һөйләтә һәм ғәжәйеп асыш яһай: мәғлүмәттәр бермә-бер тап килә. Бында ниндәйҙер осраҡлылыҡ хаҡында һүҙ әйтерлек тә түгел, сөнки хәл-ваҡиғалар икеөҫ кеше араһында ғына бара һәм ҡатмарлы мөнәсәбәттәге һәр деталь үҙ урынында ҡала.

Шулай итеп, кеше үлгәндән һуң уның йәне менән нимә була? Кеше һуңғы һулышын алып, йән бирә, туғандары, балалары, хәләле уның һыуынған ҡулын тотоп, илай-илай күҙҙәрен йомдора. Был саҡта бар донъя илай, һыҡтай, ҡайғыра. Тик тәндән айырылып сыҡҡан йән генә хахылдап көлә. Уның былдай кәйефенең тәүге сәбәбе - сирле тәндән һәм мең проблемалы кеше тормошонан айырылыу булһа, икенсеһе - яҡындарының уны үлгән тип уйлап ҡайғырыуына ғәжәпләнеү. Йән был ваҡытта тәндән айырылһа ла, эйәһенең хәтеренән айырылмайынса, ҡырҡ көн һуҙымында рухтар иленә күсеү баҫҡысын үтә. Ҡырҡ көндән һуң уның донъялыҡҡа бәйле хәтере амнезия тойғоһо кисерә, йәғни ул донъялыҡҡа бәйле үткәнен тулыһынса онота, уның ҡарауы, ул үҙ асылына, меңәр-меңәр йыллыҡ хәтерле һәм тарихлы рухтар иленә әйләнеп ҡайта. Шуға күрә лә күп осраҡта үлемде ысын мәғәнәһендәге тыуыу тип атайҙарҙыр инде. Тағы шуныһы: йән рухтар илендә үҙ мөҙҙәтен үткәргәндән һуң, тағы ла ниндәйҙер һынау үтер өсөн донъялыҡҡа ебәрелеп, әсә ҡарынындағы сабыйға инеп урынлашҡан саҡта рухтар иленә бәйле хәтере яңынан амнезияға дусар була. Сөнки уның шундайын оҙайлы тормошона бәйле хәтере кешегә йәшәргә ҡамасаулар ине.

Китапта йәндең кеше үлеменән алып кире донъялыҡҡа әйләнеп ҡайтҡанға тиклем араүыҡтағы тормошо тасуир ителә. Шуныһы ҡыҙыҡлы: йән был ваҡыт арауығында үҙенең гидтары тарафынан дәрестәр ала һәм сираттағы тормошонда башҡарған сауаплы ғәмәлдәренә ҡарап, төрлө кимәлдәргә күтәрелә, үҙебеҙсә әйткәндә, синыфтан-синыфҡа күсерелә. Әгәр ҙә йәндең эйәһе донъялыҡта ниндәйҙер гонаһтар, кешеләргә ҡарата хаслыҡ ҡылһа, ундай йән башҡаларынан айырым уҡытыла һәм, кәрәк булһа, һынау үтер өсөн тиҙ арала кире донъялыҡҡа ебәрелә.

Нисек кенә булмаһын, йәндең рухтар илендәге яҙмышын донъялыҡта хәҡиҡәткә тоғролоғо ҡотҡара. Һәр хәлдә, Майкл Ньютондың был үҙенсәлекле китабын уҡыған саҡта быға үҙең инанаһың. Алдағы һандарҙа башҡа әйтем-мәҡәлдәр хаҡында һүҙ алып барғанда был китапҡа тағы ла әйләнеп ҡайтырбыҙ әле.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 2-4-се һандарҙа).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Премьер-министры Владимир Путин Тамбовта үткән Рәсәй малсылығын үҫтереү буйынса кәңәшмәлә ит етештереү буйынса алдынғы төбәктәр исемлегендә Башҡортостанды ла атаны. Былтырғы йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда тере ауырлыкта 379 мең тонна мал һәм ҡош ите етештерелгән. Республикала сусҡасылыҡты үҫтереүгә ныҡлап тотонмаҡсылар.

✓1 февралдән бөтә төр хеҙмәт пенсиялары күләме ете процентҡа артасаҡ. Һәр оло кешенең пенсия күләме индивидуаль рәүештә арттырыласаҡ. Ике пенсия алыусыларҙың тик береһе генә - хеҙмәт пенсияһы арттырыла. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, төбәктә уртаса хеҙмәт пенсияһы күләме 560 һумға арттырылып, 8560 һумға етәсәк. Ҡартлыҡ буйынса уртаса хеҙмәт пенсияһы 8900 һум тәшкил итәсәк.

✓2011 йылда Башҡортостанда 53768 сабый донъяға килгән. Шуларҙан 519 осраҡта - игеҙәктәр, 11 осраҡта өс игеҙәк тыуған. Малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда ике меңгә тиерлек күберәк тыуған, йәғни 27 819 малай һәм 25 949 ҡыҙ донъяға килгән, тип хәбәр итә Рәсәй Федерацияһы Социаль страховка фондының Башҡортостан буйынса төбәк бүлексәһе матбуғат хеҙмәте.Фондтың эҙләү-мониторинг системаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, Башҡортостанда 2011 йылда тыуған балалар иҫәбе уның алдағы йыл менән сағыштырғанда 3,7 процентҡа кәмегән.

✓Рәсәй буйынса уртаса алғанда 2011 йылдағы тыуым күрһәткестәре уҙған йыл кимәлендә ҡалған. Отчет осоро йомғаҡтары буйынса республика Волга буйы федераль округында һаман да алдынғы урында тора, ә Рәсәйҙә Мәскәүҙән (102 984 бала), Мәскәү өлкәһенән (62 902 бала), Краснодар крайынан (62627 бала) һәм Свердловск өлкәһенән (56 935 бала) ҡала бишенсе урында килә.

✓Өфө районының Ҡыҙыл Яр ауылында БР Халыҡтар дуҫлығы йортоноң милли-мәҙәни йәмғәт берекмәләре, тарихи-мәҙәни үҙәктәр етәкселәренең кусмә кәңәшмәһе үтте. Тарихи-мәҙәни үҙәктәрҙең 2011 йылдағы эшмәкәрлеге йомғаҡтары тураһында БР Халыҡтар дуҫлығы йорто директоры Вельмир Аҙнаев сығыш яһаны.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## КҮҘӘТӘӘ-ӘЛӘР...

**Өфөлә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу осраҡтарын теркәүсе автоматлаштырылған үҙәк эшләй башланы. Бында ҡала юлдарында ҡуйылған видеокамераларҙан килгән мәғлүмәттәр эшкәртелә.**

Салауат Юлаев проспектының СССР-ҙың 50 йыллығы, Сәғит Агиш, Баҡалы, Октябрь революцияһы урамдары менән киҫелешендә ҡырҡҡа яҡын яңы ҡорамал ҡуйылған. Ошондай уҡ комплект Ырымбур трактындағы "Метро" сауҙа комплексы янында ла урынлаштырылған. С. Агиш урамындағы тубдиспансер эргәһендә һәм Сипайлово урамындағы 6-сы Өфө автотранспорт предприятиеһы янында юлды күҙәтеүсе видеокомплекстар урын алған. "Былтыр фиксация зоналарында ауыр эҙемтәләргә килтергән юл-транспорт ваҡиғалары теркәлмәне. Комплекстар 2008 йылдан файҙаланыла, материалдарҙан күренеүенсә, тиҙлекте арттырыуға бәйле ҡағиҙә боҙоуҙар әкренләп кәмей", - тип аңлатма бирҙеләр БР буйынса Эске эштәр министрлығы ЮХХДИ идаралығының матбуғат хеҙмәтендә. Республика автоинспекцияһында хәбәр итеүҙәренсә, тәүлек эсендә бер автоматик фиксация комплексы 150-нән 800-гә тиклем ҡағиҙә боҙоу осрағын асыҡлай. Водителдәр башлыса тейешле тиҙлекте сәғәтенә 10-20 километрға арттыра. Былтыр фотоматериалдар буйынса Үҙәк хеҙмәткәрҙәре 34 миллион һум күләмендә127 мең штраф һалған.

## КҮРКӘМЛӘНҺЕН...

**Өфө ҡалаһы биләмәһен тағы ла уңайлыраҡ, күркәмерәк итеү маҡсатында 1996 йылда раҫланған генераль планға өҫтәмәләр индереләсәк.**

Билдәләнеүенсә, төрлө кимәлдәге автомобиль парковкалары төҙөү, ҡаланың инженер-техник инфраструктураһын үҫтереү, камиллаштырыу, шул иҫәптән тарихи үҙәк тирәһендә лә төҙөкләндереү эштәре аткарыу - маҡсатлы һәм системалы рәүештә башҡарылыуҙы талап иткән мәсьәләләр. Транспорт хәрәкәтен көйләү һәм генплан буйынса парковкалар урындары булдырыу маҡсатында транспорт юлдары киҫешкән урындарҙы янынан үҙгәртеп ҡороу тәҡдим ителәсәк. Салауат Юлаев проспектының Әй һәм Киров урамдары менән киҫешкән урында, шулай уҡ Октябрҙең 50 йыллығы урамы менән Минһажев урамы, Коммунистик урам менән Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урындарҙағы юлдарҙа юл үткәргестәр төҙөү күҙ уңында тотола. Совет майҙанында ер аҫты парковкалары һәм йәйәүлеләр өсөн ер аҫты үткәргестәре төҙөү, Үҙәк баҙар эргәһендә Октябрҙең 50 йыллығы менән Цюрупа урамдары киҫешкән урында ла шундай уҡ комплекслы саралар ҡаралған. Телеүҙәк менән Конгресс-холл араһындағы майҙанда йәйәүлеләр өсөн айырым юлдар, ял итеү һәм күркәм саралар үткәреү өсөн майҙансыҡтар эшләү, шулай уҡ автомобиль ҡуйыу урындарын айырым эшләү планлаштырыла.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Өфө - Башҡортостандың йөҙө ул, тиеү менән берәү ҙә бәхәсләшмәҫ. Сит тарафтарҙан килеүселәрҙең тотош республика тураһындағы фекере, күҙаллауҙары Өфө тупһаһын аша атлау, уның урамдарынан үтеү, кешеләрҙең йөҙҙәренә һәм ҡылыҡ-фигеленә бағыу аша формалаша. Башҡорт иленең баш йорто икән, тимәк, Өфөбөҙҙә башҡорт донъяһы ла ни рәүешлелер сағылыш табырға тейеш, тиеү ҙә бәхәсһеҙ. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы БАЯЗИТОВ менән әңгәмә ҡорғанда беҙ тап ошоға - баш ҡаланың милли йөҙө ниндәй, тигән һорауҙы асыҡлауға баҫым яһаныҡ.**



# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## милли йөҙө бармы?

**➔ Республика районларына, ҡалаларына командировкаларға сыҡҡанда аҙым һайын тиерлек төрлө хаталы яҙылған атамаларға, алтаҡталарға юлығырға тура килә. Һәм, әлбиттә, урындарҙа уҡ "Ә һеҙҙә "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссиялар эшләмәйме ни?" тигән һорау бирелмәй ҡалмай. Яуаптарҙан, ыҡ-мыҡ итеүҙәрҙән һуң "Комиссиялар эшләһә, аҙым һайын хаталар осрамаҫ ине бит инде", тигән фекер нығына. Әлбиттә, хаталы яҙыуҙар Өфөлә лә етерлек. Әммә улар тағы ла күберәк булыр ине, әгәр...**

- Эйе, Өфө ҡала округы хакимиәте эргәһендәге хакимиәт башлығы үҙе етәкләгән комиссия эшләмәһә, был тәңгәлдә проблемалар тағы ла күберәк булыр ине. "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссия ярҙамында баш ҡалала туған телдәрҙе үҫтереү, уларҙың абруйын күтәреү йәһәтенән ҙур тәжрибә тупланды, байтаҡ үрҙәр яуланды. Комиссия ултырышы квартал һайын уҙғарыла. Унда Закондың үтәлеше тураһында баш ҡала район хакимиәттәре башлыҡтарының, төрлө предприятие етәкселәренең сығыштары тыңлана. Комиссия ағзалары бер мәсьәләне генә хәл итеп туктап ҡалмай, уларҙан көндәлек эш талап ителә. Сөнки миллиондан ашыу кеше йәшәгән ҡалала үҙгәрештәр артынан үҙгәрештәр булып тора. Көн һайын ҡалала сауҙа нөктәләре, ойошма-предприятиелар барлыҡҡа килә. Һәр эшҡыуар халыҡты йәлеп итер өсөн үҙ предприятиеһына сағыу, ылыҡтырғыс исем ҡушырға ынтыла. Кемдер бының өсөн сит тел һүҙҙәре ҡулайлыраҡ, тип иҫәпләй. Әлбиттә, ундай атамалы алтаҡталар ҡала йөҙөн йәмләмәй, быны халыҡ та хушһынмай. Комиссия бөтөн был үҙгәрештәрҙең закон талаптарына яуап биреү-бирмәүен тикшереп, кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереп, иҫкәртеүҙәр яһап тора. Был осраҡта етәкселәр менән бәйләнешкә инеп, ике дәүләт телендә - башҡортса ла, русса ла матур яңғыраған атамалар биҙәп торорға тейеш ҡаланы, тигән талап ҡуйып, аңлатыу эштәре алып барабыҙ.

Комиссия ҡарамағында даими эшләүсе айырым Терминологик төркөм бар. Алтаҡталарҙағы, реклама таҡталарындағы, төрлө атамаларҙағы, рәсми бланкыларҙағы русса һәм башҡортса яҙыуҙарҙа хаталар табылһа, төрлө ойошма һәм предприятиелар ошо төркөм ағзаларына мөрәжәғәт итә. Төркөмгә Башҡортостан Фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғалимдары, ике телде лә яҡшы белгән, профессиональ йәһәттән ниндәйҙер уңыштарға өлгәшкән филологтар ингән. Баш ҡалала һәр яңы асылған сауҙа йә башҡа йүнәлештәге предприятие ошо терминологик төркөм аша үтергә, үҙ атамаһын дөрөҫ итеп башҡортса тәржемә иттерергә, ике телдәге яҙыуҙарҙың алтаҡтала, бланкыларҙа дөрөҫ урынлашыуына өлгәшергә тейеш. Былтыр ғына, мәҫәлән, төркөмгә Өфө ҡалаһының 1500 предприятие-ойошмаһы мөрәжәғәт иткән һәм башҡортса текстар эшләтеп алған.

Баш ҡалалағы хаталы яҙыуҙар менән комиссия ғына түгел, ә граждандар үҙҙәре лә көрәшергә тейеш. Мәсьәлә шулай ҡуйылған. Шуға ла халыҡҡа, хаталы яҙыуҙар күрһәгеҙ, "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закондың боҙолоу осраҡтарын шәйләһәгеҙ, битараф ҡына үтеп китмәгеҙ, Өфөнөң һәр район хакимиәтендә эшләгән комиссияларға мөрәжәғәт итегеҙ, тип әйтә йөрөйбөҙ. Был эшкә халыҡтың иғтибарын йәлеп итер өсөн "Хатаһыҙ ҡала" һәм башҡа акциялар ойоштороп торабыҙ. Акцияларҙа ҡатнашыусыларға иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Был өлкәлә беҙҙең тағы бер дәртләндереү сараһы бар: "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыуға үҙ өлөшөн индергән әүҙем кешеләргә - уҡытыусыларға, журналистарға, башҡа граждандарға йыл һайын баш ҡала округы хакимиәте 15-20 мең һум премия тапшыра.

**➔ Мәктәптәрҙә яңы белем биреү стандарттары индерелә. Үҙгәрештәр мәлендә, аңлыштанмы, әллә ошо стандарттарға һылтаныпмы, туған телдәрҙе уҡытыуға ҡаршылыҡ тыуҙырыу осраҡтары ла булды. Һәр хәлдә, республиканың ҡайһы бер районларында башҡорт теле дәрестәренең ҡыҫҡартылыуы тураһында хәбәрҙәр ишетергә тура килгәләне. Ә бына Өфөлә туған телдәрҙе уҡытыу мәсьәләһе яңы стандарттарға нисегерәк ҡулайлаша?**

- Өфө мәктәптәрендә 760 башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы эшләй. Баш ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы алдында торған бурыстарҙың береһе - ошо белгестәрҙе ҡыҫҡартыуға юл ҡуймау, сәғәттәр һанын кәметмәү. Бөгөн бөтә ҡала мәктәптәрендә лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре элеккеә туған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та уҡытыла. Мәғариф идаралығы, хакимиәт тарафынан уҡыу-уҡытыу пландары тикшерелеп, уларҙың үтәлеше күҙәтелеп барыла. Сөнки талап ҡуймайынса, был өлкәлә эште һөҙөмтәле тормошҡа ашырыуы барыбер ҡыйын.

Мәктәптәге дәрестәр менән генә сикләнмәй, телде үҫтереү йәһәтенән балаларҙы төрлө сараларға йәлеп

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Былтыр Өфөлә 702 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән һәм сафҡа индерелгән. Был 2010 йылдағы кимәлгә ҡарата 107,3%. Шәхси торлаҡ төҙөлөшөнөң өлөшө 51,6 процентты тәшкил иткән. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Йосопова әйтеүенсә, былтыр торлаҡ менән бер рәттән социаль объекттар ҙа күпләп төҙөлгән. Мәҫәлән, "Кариҙел", "Инорс-7", "Дим-8", "Сипайлово-1" һәм "Сипайлово-5" биҫтәләрендә балалар баҡсалары сафҡа индерелгән. Яңы уҡыу йылы башланыуға Өфө дәүләт авиация техник университетының уҡыу корпусы файҙаланыуға тапшырылған. Һаулыҡ һаҡлау объекттарынан Республика клиник дауаханаһының Пушкин урамы, 99 адресы буйынса урынлашҡан 2-се поликлиникаһы корпусы файҙаланыуға тапшырылған.

✓Февралдә йола буйынса Башҡортостан вуздары Асыҡ ишектәр көндәре үткәрәсәк. Тәүгеләрҙән булып Асыҡ ишектәр көндәре Өфө дәүләт нефть техник университетында үтә. Бында сара 4 февралдә 12 сәғәттә 8-се корпуста; 5 февралдә шулай уҡ 12 сәғәттә 5-се корпуста үтәсәк.

✓М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында абитуриенттар өсөн яңылыҡ тәҡдим итмәкселәр. Һорауҙарға ҡабул итеү комиссияһының яуаплы секретары Фиданис Тимерханов һәм студенттар профкомы рәйесе Марат Хафизов яуап бирәсәк. Белешмә өсөн телефон: (347) 272-11-16.

✓Өфө дәүләт авиация университеты үҙенең абитуриенттары өсөн математика, рус теле, физика, информатика һәм башҡа предметтар буйынса Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеү өсөн репетиция тестары ойоштораса. Улар һәр шәмбе һайын үткәреләсәк. Тулыраҡ мәғлүмәтте уҡыу йортоноң сайтында "Абитуриенттарға" бүлегендә табырға була.

✓Өлкән синыф уҡыусылары һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн үҙ ишектәрен Башҡорт дәүләт университеты - 11 февралдә 12 сәғәттә, Башҡорт дәүләт аграр университеты 18 февралдә шулай уҡ 12 сәғәттә асасаҡ. Белешмә өсөн телефондар: (347) 228-02-54, 228-68-11, 228-08-98.

итергә кәрәк икәнен дә беләбеҙ. Ошоно иҫәпкә алып, баш ҡалала, мәҫәлән, бына ун йыл инде балалар өсөн "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсы ойоштороладыла. Конкурсты башлағанда маҡсатыбыҙға өлгәшербеҙме, балалар үҙ телендә юмор алымдарын таба алырмы, шаяртыуҙары урынлы һәм ысынлап та көлкөлө булырмы, тигән уй-шикләнеү ҙә булғайны. Ләкин борсолоуыбыҙ бушҡа булды. Уҡыусылар конкурста ҙур теләк менән ҡатнашалар, ул бынамын тигән башҡорт юморы сараһына әйләнде. Тәүге йылдарҙа был сара башҡорт мәктәптәре балалары араһында ғына үтһә, хәҙер конкурсҡа рус мәктәптәрендәге башҡорт телен өйрәнеүсе балалар ҙа ҡушылды.

Өфө балаларының туған телгә һөйөүе, туған тел буйынса белем кимәле арта барыуы ҡыуандыра мине. Бөгөн улар башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса республика олимпиадаларында ла тәүге урындар яулай башланы. Бында ижади ҡарашлы, рухлы, ошо рухты уҡыусыларына ла еткерә алған педагогтарҙың да өлөшө ҙур.

Өфө мәктәптәрендә белем алған башҡорт балаларының рухын, белем кимәлен, лидерлыҡ һәләттәрен күҙ алдына килтереү өсөн ике йыл элек уҙғарылған башҡорт балалары ҡоролтайын миҫал итеп килтерергә була. Ундағы рух, балаларҙың сығыштары беҙҙең Өфө мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыуҙың кимәлен дә асыҡ күрһәтте, тип уйлайым. Сығыш яһарға йөҙләп бала әҙерләнгәйне, ундан ашыу балаға быңдай бәхет эләкте. Сығыштар башҡорт донъяһының төрлө өлкәләренә, халҡыбыҙҙың тарихына ла, мәҙәниәтенә лә, тел һәм әҙәбиәтенә, сәнғәтенә лә арналды. Сәхнәлә сығыш яһағандарҙан тыш, күптәр залда ағайғырә баҫып, уларҙы тыңландырҙы, фекерҙәр өҫтәне. Ғөмүмән, әле бер ҡасан да, бер ҡайҙа ла башҡорт балаларының туған телдә ошолай иркен итеп фекер алышып, мәсьәләләр күтәреп, оптимизм менән һуғарылған йыйын үткәргәнен хәтерләмәйем. Бындай рухлы сара өлгөһөн тап Өфөнөң башҡорт балалары күрһәтте.

➔ **Өфөлә мәҙәниәт, сәнғәт үҙәктәре күп. Уларҙың күбеһе дәүләт статусында. Ә бына муниципаль кимәлдәге башҡорт мәҙәниәте Өфөлә нисек сағылыш таба?**

- Баш ҡалабыҙҙың сәнғәт донъяһы тәү сиратта "Мираҫ" ансамбле аша сағылыш таба. Өфөбөҙҙөң йөҙөк ҡашы тип әйтер инем уны. Муниципаль ансамбль булараҡ, сит илдәргә гастролдәр менән сығып, ул ундағы тамашасыларға Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһын, уның рухын таныта. Ниндәйҙер фестиваль, эшлекле осрашыуҙарҙа ҡатнашҡанда ла баш ҡаланың рәсми кешеләрен "Мираҫ" оҙатып йөрөй. Төркиәлеге туғандаш ҡалаларҙа - Анкара, Истанбулда - йыш сығыш яһарға тура килә. Унда "Мираҫты" гел яратып ҡабул итәләр, таныйҙар. Шуға күрә ансамбль, бер яҡтан, дуҫлыҡ нигеҙен нығытһа, икенсе яҡтан, Башҡортостан сәнғәтен, Өфө йөҙөн танытыта. Маҡсатыбыҙ ҙа тап шунда бит.

Һәм тағы. Йыл да беҙ Өфөлә Әҙһәм Исҡужин исемендәге ҡурайсылар конкурсы уҙғарабыҙ. Баш ҡала конкурсы булып ойошторолһа ла, унда бөтә республиканан ҡурайсылар ҡатнаша ала. Ҡурай конкурстары бер нисәү, әммә беҙҙең конкурстың үҙенсәлеге шунда: ҡатнашыусылар ҡурайҙа көй башҡарыуҙан тыш, халыҡ йырын да йырлап күрһәтергә тейеш. Был конкурс тап шуныһы менән ҡыҙыҡлы һәм башҡаларынан айырылып тора ла инде.

Бер нисә йыл элек баш ҡала кимәлендә башҡорт сәсәндәре конкурсын ойоштороп ебәргәйнек. Шуны хәҙер тергеҙеү бурысы тора алдыбыҙҙа. Өфөлә сәсәндәр юҡ, тигәнерәк һылтау менән туҡталып торғайны был конкурс. Әммә талантлар юҡ, тип әйтеүе еңел, шул таланттар тыуһын өсөн низер эшләргә кәрәк бит. Ғөмүмән, ҡаланың мәҙәни тормошона, шулай уҡ Өфөбөҙҙөң милли йөҙөн иждад итеүгә, булдырыуға балаларҙы, йәштәрҙе әүҙемерәк йәлеп итеү өстөндә эшләргә кәрәк. "Йәштәргә әхләҡи-патриотик тәрбиә биреү" дәүләт программаһы ҡабул итергә тора. Шуның сиктәрендә беҙҙә лә һөҙөмтәле эш алып барылыр, тип уйлайым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡалала милли йөҙ, рух тойғоһо юҡ, тигән фекер иҫкерә бара, буғай. Һәр хәлдә, Өфөгә ҡарата былай тип әйтеп булмай. Тик республиканың башҡа ҡалаларында ла сағылырға тейеш бит милли йөҙ, милли колорит. Был йәһәттән Өфө барыбер ҙә башҡаларға матур өлгө бирә кеүек. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ?**

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**



"Мираҫ"тар менән Төркиәлә.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ТАРИФТАР ҠАЙҘАН АЛЫНА?

**Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә түләү тураһында квитанциялағы " Торлаҡты бағыу" тигән пункт нимәне аңлата?**

- "Күп фатирлы йорттағы дөйөм милекте бағыу ҡағиҙәләре"нә ярашлы "Торлаҡты бағыу" тигән статьяға түбәндәгеләр инә:

● Баҫҡыс майҙансыҡтарын йыйыштырыу (һепереү - биш көнгә бер, иҙән йыуыу - айына бер).

● Баҫҡыс майҙансыҡтарын ремонтлау (түбәләрҙе ағартыу, стеналарҙы, батареяларҙы, тәҙрәләрҙе һ.б. буяу) - 3-5 йылға бер.

● Йорт алдын йыйыштырыу -һауа торошона ҡарап,йәкшәмбенән тыш- көн дә.

● Таҙа һәм тәҙәк хәлдә тотоу: сарҙаҡтарҙы,техник ҡаттарҙы, ҡыйыҡты, һыу ағыусы торбаларҙы, подвалдарҙы, электр селтәрҙәрен, торлаҡ йорт эсендәге электр приборҙарын, һыуыҡ һәм эҫе һыу үткәреүсе торбаларҙы, канализацияны, йылылыҡ биреү приборҙарын, подъезд ишектәрен.

● Торлаҡ йорт элементтарына (фасад, балкон һ.б.) ваҡ ремонт яһау.

● Сүп-сарҙы сығарыу - көн һайын.

● Йорт алдын йәшелләндереү һәм тәҙекләндереү.

**Йылылыҡ биреү сезонында йорто бүлмәһендә температура 20 градустан күтәрелмәй. Торлаҡсылар, шулай тейеш, ти. Был дөрөҫмө?**

- Дөрөҫ. Йылылыҡ биреү осоронда фатир бүлмәләрендә һауа температураһы 20 градустан да түбән булырға тейеш түгел, мөйөштәге бүлмәләрҙә - 22, ванна бүлмәһендә - 25,туалетта - 16. Баҫҡыс майҙансыҡтарында ҡыш шулай уҡ - 16, сарҙаҡта 12-14 градус йылылыҡ ҡаралған.

**Туғыҙ ҡатлы йорттоң беренсе ҡатында йәшәйем, лифт өсөн түләмәйем. Күптән түгел ремонт ваҡытында яңы лифт ҡуйҙылар, уның өсөн миңә түләү һалмаҫтармы?**

- Лифт күп фатирлы йорттағы бөтә биналар милексәләренең дә дөйөм милке иҫәпләнә, шуға күрә, ҡайһы ҡатта йәшәүенә ҡарамаҫтан, уның өсөн һәр кем түләргә бурыслы. Икенсе яҡтан, тәүге ҡатта йәшәүселәрҙән лифт өсөн түләтеү мәсьәләһен милексәләрҙең дөйөм йыйылышы ҡарай ала, әгәр ул һыңай ҡарар сығарған хәлдә, тәүге ҡаттағыларҙың өлөшөн кем түләргә тейешлеге өлеге ҡарарҙа айырым-асыҡ күрһәтелергә тейеш: башҡа ҡаттарҙа йәшәүселәр был сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алырға бурыслы булып сыға.

**Тарифтар ҡайҙан алына һәм улар хаҡында нисек белешмә алырға була?**

- Коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү күләме йортто яҡтылыҡ, һыу һ.б. менән тәьмин иткән компаниялар тарифынан сығып иҫәпләнә. Мәҫәлән, Өфөлә улар "Уфаводоканал" идаралығы, "Өфө төбәк-ара газ" йәмғиәте, "Башҡортостан энергетика һатыу компанияһы". Улар тарафынан йыл һайын етештереү программаһы эшләнә. Улар ремонт эштәре, ресурс һәм материалдар өсөн сығымдар исемлеген һәм хаҡын уларҙың хаҡтары арта барыуын иҫәптә тотоп башҡара. Ошо документ нигеҙендә компаниялар тарифтарҙы иҫәпләп сығара һәм Тарифтар буйынса дәүләт комитетына ебәрә. Ул тарифтарҙың нигеҙлеме, юҡмы икәнлеген тикшерә һәм аҙаҡҡы һөҙөмтәне раҫлай. Ләкин тарифтарҙың үҫеш кимәле Тарифтар буйынса федераль хеҙмәт тәкдимдәре буйынса билдәләнә. Коммуналь хеҙмәттәргә түләү күләменең нисек башҡарылыуы тураһында мәғлүмәтте ошо телефон буйынса белешә алаһығыҙ: 8 (347) 262-31-41.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләнә.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## ПИЕЛОНЕФРИТ, НЕФРИТ

❖ Урта Азияла ауыртҡан бөйөрҙәрҙе көнбағыш эшләпәһенең һары сәскәләре ярҙамында дауалайҙар. Уларҙы йыйып, ҡояш төшмәгән ерҙә урында киптергәс, йыл дауамында ябай сәй кеүек бешереп эсергә;

❖ көнөнә ике сынаяҡ гөлйемеш емеше төнәтмәһен эсергә;

❖ ике ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле япраҡтарына бер стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 30 минут ҡайнар һыулы кәстрүл өҫтөндә тоторға. Яртышар стаканлап көнөнә 2-3 тапҡыр эсергә;

❖ 2 ҡалаҡ баҫыу ҡырҡбыуыны (хвощ полевой) үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға , бер сәғәт төнәтергә һәм көн дауамында эсергә;

❖ 1 балғалаҡ әнис орлоҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуҙа 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә ашарҙан 20 минут алда эсергә;

**Пиелонефрит ҡиҫкенләшеп киткәндә:** Арыҫлан ҡойрого үләне (пустырник), һары мәтрүшкә (зверобой), ала миләүшә (фиалка трехцветная) үләнен бер тигеҙ өлөштә алып, бер һауытта болғатығыҙ. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡоябыҙ, һыу ҡайнап ултырған кәстрүлдә ун минут тотабыҙ һәм ярты сәғәт төнәтәбеҙ. Көнөнә 2-3 стаканлап йылы көйөнсә эсергә.

**Пиелонефрит билдәләрен һәм шешенеүҙе бөтөрөү өсөн:** 2 ҡалаҡ кипкән әнисте (укроп) 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтәбеҙ. Быныӊ өсөн керамик сынаяҡ алыу яҡшыраҡ, өҫтөн сынаяҡ аҫты менән ҡаплағыҙ һәм һыуынғансы тотоғоҙ. Табиптар былдай төнәтмәне көнөнә ике сынаяҡ эсергә ҡуша. Шулай уҡ петрушка менән дә дауаланырға мөмкин. Быныӊ өсөн таҙартып йыуылған петрушка тамырын турарға һәм бер ҡалаҡ тамырҙы бер стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә. Әнисте төнәткән кеүек төнәтергә һәм көнөнә 3 стаканға тиклем эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ БР Урман хужалығы министры бойороғона ярашлы, республикала торлаҡ төҙөлөшө программаһын үтәү маҡсатынан ылыҫ урманы буйынса ағас ҡырҡыуға рөхсәт торлаҡ төҙөлөшө өсөн генә биреләсәк.*






# ГҮЗӘЛЛЕК ТҮГЕЛ...

## намыҫлы булыу өҫтөн

Тәрбиәле ҡатын өҫ-башын һәр ваҡытта ла таҙа һәм яҡшы итеп йөрөткән кеүек, өйөн дә таҙа итеп тотор. Ислам шәриғәте буйынса, таҙа булыу - һәр мосолмандың өҫтөнә бурыс итеп һалынған.

"Өйҙөң бысраҡ тороуы - унең ҡасан да булһа харап буласағына бер билдә", тиҙәр. Өйҙә тәрбиәле ҡатын йәшәгәнлегенә - өйҙөң таҙалығы, юҡлығына - уның бысраҡлығы дәлил булыр. Ирҙәренә мәхәббәтле күренеү өсөн пакланыу, кейенеү, хатта ки хушбуй һөртөү - тыйылған гәмәл һаналмай. Ҡатындарҙың тәрбиәле булыуы бөтөн Ислам халҡы өсөн кәрәкле бер эш булһа, кейем-һалым һәм башҡа зиннәттәр фәҡәт ирҙәре өсөн булырға тейеш. Был йәһәттән, туйҙарға, ҡунаҡҡа барғанда, урамға сыҡҡанда зиннәтле кейенеп, ирҙәре янына ҡайтҡас, иҫке йәки бысраҡ кейемдә йөрөүсе ҡатындар ысынында тәрбиәһеҙҙәр.

Тәрбиәле ҡатын әҙәпле булырға тейеш. Ҡатындарының әҙәпһеҙ булыуына һәм оятһыҙ ҡыланыуына тиҙ ҡыҙыусан ирҙәрҙең берене лә риза булмаҫ ине. Ҡатынының намыҫһыҙлығын белгән ирҙең шул сәғәттә үк уға мәхәббәте һүнер һәм нәфрәтләнер, ихласлы, йәғни керһеҙ күңелле икенсе ҡатынға күҙ һалыр. Ояла белгән кеше ни ҡәҙәр фәҡир булһа ла, әҙәмдәр алдында хөрмәтле булыр. Оятһыҙ кеше ни ҡәҙәр бай булһа ла, үҙенә иғтибар йәлеп итмәҫ. Оят - Ислам ағасының бер тармағы булыр, тамырҙары - ожмахта, тармаҡтары - донъяла. Был тармаҡтарға йәбешкән зат, әлбиттә, тамырҙарына тоташа алыр.

Ҡатындарҙың йөҙҙәрендә оялыуҙан барлыҡҡа килгән ҡыҙыллыҡ әҫәре - ул ирҙәрҙең күңелдәренә йөшендән тиҙ һәм ҡеүәтле тәьҫир итә һәм мәхәббәт орлоҡтары сәсә. Һүҙ йөрөтөү, ғәйбәт һәм ялған һөйләү кеүек боҙоҡ холоҡтар оятһыҙлыҡ була. Ирене һөйләнгән яман һүҙҙең яманлығы ике дәрәжә артыҡ булыр.

Тәрбиәле ҡатындың өйөндә бар әйбере лә тәртип менән ятыр. Тәртипле булыу - һәр нәмәнең үҙ урынында булыуы ул. Өй әйберҙәре билдәле һәм үҙҙәренә яраҡлы урында торһа, яҡшы һаҡланыр һәм уларҙы эҙләп табыуы еңел булыр. Бер һүҙ менән әйткәндә, өйөн тәртипкә һалмаған ҡатындың эше мәғәнәһеҙ һәм ахырһыҙ булыр.

Тәрбиәле ҡатын сәләмәтлегенә зыян килтерерҙәй әйберҙәрҙән дә һаҡланыр. Сәләмәтлеккә зарар итәсәк нәмәләрҙең барлыҡ кешеләргә мәғлүм булғандары: тән ҡыҙғандан һуң һалҡын һыу эсеү йәки өшөү, йәшәй торған урындың дымлы булыуы, майлы нәмәләрҙе, шулай уҡ ризыҡты күп ашау, иҫерткес эсемлектәр эсеү һәм отош уйындары уйнау, зина ҡылыу һәм башҡалар.

Сәләмәтлектең мөшһүр сәбәптәре: тән һәм кейемде, йәшәй торған урынды таҙа тотоу, тәһәрәт алыу һәм ғөсөл ҡойоноу, намаҙ уҡыу, өй эсендә булған хеҙмәттәрҙе үтәү һәм башҡалар. Әгәр ҙә берәй төрлө ауырыу пайҙа булһа, ғәҙәттән тыш ҡайғырыу һәм хәсрәтләнеү ярамаҫ. Бындай саҡта Аллаһы Тәғәләнең хөкөмөнә сабыр итеп, Уның мәрхәмәтенә ышанып, дауаһын эҙләргә тейеш булаһың. Сөнки Алла сирен биргәс, уға дауаһын да бирә.

Шулай итеп, кешеләрҙең бәхет-сәғәҙәттәре - ҡатындар ҡулындалыр. Ә бер ҡатындың байлығы - иренең мәхәббәтелер.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Ҡасандыр бер танышымдың: "Олоғая бара баш ергә нығыраҡ эйелә", - тигәне хәтергә мәңгелеккә һеңеп ҡалды. Хәҙер инде был һүҙҙәрҙе үҙгәртеп, халыҡтың үҙаңы уяна барған һайын баш ергә нығыраҡ эйелә, тип тә әйтергә мөмкин. Сөнки баш ҡаланы яуларға килеп тулған милләттәштәребеҙҙең күпселеге кеше тупһаһында, дөйөм ятаҡтарҙа көн күрһә, бөгөн уларҙың, уларҙың ғына түгел, район үҙәктәрендә йәшәүселәрҙең дә ер алып, үҙ йортон төҙөү, үҙ ҡәлғәһен ҡороу өсөн мөмкинлеге киңәйҙе. Икенсе яҡтан, "баштың нисек итеп ергә нығыраҡ эйелеүе"нең асылы, әлбиттә, ул тыуған ерең рәхмәтле була белеү. Сөнки ерең бар икән, һин бер ваҡытта ла ас ултырмаясаҡһың, үҙеңдең "ҡульяулыҡ" дәүмәле генә ерендә лә ғаиләнде туйҙырырлыҡ ризыҡ үҫтерә алаһың, өсөнсөнән, ысынлап та, олоғая килә, ерҙә эшләү теләге көсәйә, унда соҡсонғо, ҡаҙынғы килә, тигәндәре хаҡтыр. Ә ерҙә ҡайҡайып баҫып эшләп булмай, башыңды эйгәндә генә ер һиңә теләгәнеңде бирә. Шулай ҙа иң мөһиме - тап олоғая килә аҫабалығыңды нығыраҡ аңлайһың, был - минең ерем, тип күкрәк киреп әйтә алырлыҡ ерең булыуын теләйһең. Бәлки, балаларыңа ҡалдырыласаҡ иң ҡиммәтле үә зиннәтле мираҫың да ошо ерҙер. Һуңғы ваҡытта, Аллаһҡа шөкөр, мегаполистарҙағы, район үҙәктәрендәге йорт-ерһеҙ граждандарға ла бәхет күге асылды, шикелле.**

# ЕР АЛАЙЫҠ ТА...

## өй һалайыҡ!




Ошо көндәрҙә республикала 2222 ғаиләнең бушлай ер алыуы тураһында мәғлүмәт донъя күрҙе. Ә бит күптән түгел генә үткән "Рәсәй әсәләре" Бөтә Рәсәй форумында сығыш яһап, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов республикала өс һәм унан күберәк бәлиғ булмаған балалы ғаиләләргә, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә шәхси йорт төҙөлөшө өсөн ер бүлеү тураһындағы законға ҡул ҡуйылыуы хаҡында белдереп, әлегә граждандарға ер участкалары бүленмәй, сөнки ҙур бюроктратик ҡаршылыҡтар процедураһын үтә, тип белдергәйне. "Был участкаларҙы бүлергә, межаларға, һыу, газ, электр энергияһы үткәреү мәсьәләләрен мөмкин тиклем хәл итергә кәрәк. Кешене ҡола яланға килтереп булмай ҙа инде", - тигәйне. Тимәк, ысынлап илаһаң, һуҡыр күҙҙән дә йәш сығыуы мөмкин.

Бөгөн Башҡортостанда 33263 ғаилә өс һәм унан да күберәк бала тәрбиәләй. Инвалид бала тәрбиәләүсе ғаиләләр һаны 14 меңдән ашыу. Әммә ошо ғаиләләрҙең ни бары 4093-ө генә район һәм ҡала хакимиәттәренә торлаҡ шарттарын яҡшыртыу тураһында ғариза менән мөрәжәғәт иткән.

Тағы бер ҡыуаныслы яңылыҡ: Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бер тапҡыр бушлай ер алырға хоҡуҡлы граждандарҙың һәм кәрәкле документтар исемлеген раҫланы. Был хоҡуҡҡа биш категория граждандар эйә: торлаҡҡа мохтаждар сифатында иҫәптә тороусы граждандар; икеһенең береһенең йәше 35-тән артмаған, бер йәки унан күберәк балалары булған, милкендә торлағы булмаған һәм торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға иҫәптә тормаған йәш ғаиләләр, йәки шундай уҡ шарттарҙа тулы булмаған ғаиләләр;

торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға иҫәптә тормаған, милеккә эйә булмаған, билдәһеҙ ваҡытҡа йәки өс йылдан да кәм булмаған ваҡытҡа төҙөлгән хеҙмәт килешеүе буйынса бюджет өлкәһендә эшләүселәр; өс йәки унан да күберәк бәлиғ булмаған балалары булыусылар; инвалид бала тәрбиәләүселәр. Бәлиғ булмаған өс йәки унан күберәк балалы ғаиләләр тапшырырға тейешле документтар:

- ирҙең йәки ҡатындың, ата-әсәнең шәхесен раҫлаусы документтарҙың күсермәһе;

- никах тураһындағы таныҡлыҡтың күсермәһе (булһа);

- бала тыуыу тураһындағы таныҡлыҡтарҙың йәки уларға 14 йәш тулһа, паспорттарының күсермәһе;

- ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итеү тураһында мәғлүмәттең (суд ҡарарынын) булыу-булмауы хаҡында опека һәм попечителлек органдарынан алынған белешмә ҡағыҙы;

- күсемһеҙ милеккә хоҡуҡтарҙың һәм уларға бәйле килешеүҙәрҙең Берҙәм дәүләт реестрынан ата-әсә исеменә теркәлгән милек объекттарына хоҡуҡтар тураһындағы өҙөмтә.

Инвалид балалы ғаилә ер участкаһына ғариза бирә икән, ошо документтарҙан тыш, дәүләт медицина-социаль экспертиза хеҙмәте учреждениеһынан алынған инвалидлыҡ тураһындағы белешмә ҡағыҙының күсермәһен дә бирергә кәрәк.

Документтарҙың күсермәләрен тапшырғанда уларҙың төп нөсхәләренең барлығы күрһәтелә йәки улар билдәләнгән тәртиптә раҫлана. Документ юллаусыларға Росреестрҙан мәғлүмәт алып йөрөү талап ителмәй, власть органдары уны үҙҙәре һорап аласаҡ.

Әгәр ерле булаһың икән, ул ваҡытта инде бер тапҡыр бушлай шәхси төҙөлөш өсөн ағас алыу хоҡуғынан да файҙаланырға мөмкин. Башҡортостан Республикаһының Урман хужалығы министры Р. Б. Нәбиуллиндың бойороғона ярашлы, республикала торлаҡ төҙөлөшө программаһын үтәү маҡсатынан ылыҫ урманы буйынса ағас ҡырҡыуға рөхсәт торлаҡ төҙөлөшө өсөн генә биреләсәк. Башҡортостан Республикаһының 2007 йылдың 20 ноябрендә ҡабул ителгән N 486-з һанлы "Башҡортостан Республикаһында урман мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында" БР Законының 12-се статьяһына ярашлы, граждандар 25 йылға бер тапҡыр торлаҡ йорт төҙөү өсөн 150 кубометрға тиклем; торлаҡ йортто ре-

монтлауға йәки реконструкциялауға 15 йылға бер тапҡыр 50 кубометрға тиклем; йорт ҡаралтыларын төҙөү өсөн 15 йылға бер тапҡыр 50 кубометрға тиклем; йорт ҡаралтыларын ремонтлауға 5 йылға бер тапҡыр 15 кубометрға тиклем ағас алыу хоҡуғына эйә. Ләкин юристар 150 кубометрҙың ғәмәлдә 150 кубометрға тулмаҫҡа ла мөмкин булыуын белдерә. Йәғни ағымдағы йылда урман ҡырҡыу фондының лимитына һәм сиратта тороусыларҙың һанына бәйле был һандың да үҙгәреүе ихтимал. Әгәр сиратта тороусылар күп икән, 150 кубометр урынына 90 йәки 50 кубометр ағас биреүҙәре лә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта, өй өсөн 150 кубометр ағасты ул 25 йылдан һуң ғына алырға хоҡуҡлы. Тағы шуныһы иғтибарға лайыҡ: хәҙер ағас алыу өсөн мотлаҡ урмансылыҡ хужалығының үҙенә барырға кәрәкмәй, ғаризаны, башҡа документтарҙы участка урмансылыҡтарында ла тапшырырға мөмкин. Әммә документтарҙы 1 ноябргә тиклем тапшырыу мотлаҡ, шулай булғанда икенсе йылына ағас алып ҡаласаҡһығыҙ.

Әгәр элегерәк ағас алып, уны һатыусылар ҙа осраһа, хәҙер бындай эшмәкәрлеккә кәртә ҡуйыласаҡ, ағас маҡсатлы файҙаланылмаһа, граждандарға неустойка өсөн пеня һалынасаҡ. Сөнки шәхси граждандар өсөн урман менән һатыу итеү - законда ҡаралмаған эшҡыуарлыҡ төрө булып һанала.

## *ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Венер Исхаҡов, "Башҡортостан" гәзите хеҙмәткәре:** Беҙ Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, эш башлағанда совет власының остоғо ла ҡалмағайны. Ҙур-ҙур урында ултырған ағай-апайҙарың булмаһа, бушлай фатирға ла өмөт итеү буш хыял ғына ине. Хатта дөйөм ятаҡтан баш төртөрлөк бүлмә табырлыҡ әмәл юҡ. Ә Өфөлә йәшәге килә, яратҡан эшеңде ташлап, һис тә ауылға ҡайтҡы килмәй. Шул саҡта бәләкәйерәк булһа ла өй төҙөү тураһындағы уй мейене сүкей башланы. Шулай бер ваҡыт йәштәргә ер бирәләр икән, тигән имеш-мимеш ишетелеп ҡалғас, Киров районы хакимиәтенең, баш ҡала хакимиәтенең махсус бүлмә алдын һәм тупһаһын бер ни тиклем тапаным да, унан фәтеүә булмаясағын аңлағас, ерҙе ҡулдан ғына һатып алырға булдым. Нишләп мин барлы-юҡлы ғына аҡсамды теләһә кемгә таратып, фатирға түләп торам әле?

Был 1999 йыл ине. Ул ваҡытта бөгөнгө кеүек йәш ғаиләләр өсөн льготалы программалар таралмағайны, субсидия тигән нәмә лә юҡ ине. Декабрҙә Затон биҫтәһенән ун сутый ер алып, яҙын ауылдан бәләкәйерәк өй килтереп, ике ай тигәндә күтәреп ҡуйып, йәшәй ҙә башланыҡ. Үҙеңдең өйөң үҙеңдеке инде. Атай-әсәйемә, туғандарыма рәхмәт! Уларҙың рухи ярҙамын да, матди ярҙамын да тойҙом. Ожмах кеүек күренде беҙгә үҙ йортобоҙ. Эргә-тирәлә башҡорттарҙың күп булыуы ла күңелгә ятышлы булды. Дүрт йыл буйы мейес яғып йәшәнек. Хеҙмәттәштәрем, журналистар араһында бындай хәл булғаны юҡ ине әле, һин беренсе булып ер алдың, үҙ өйөңдө һалып индең, тип тә әйтә торғайнылар. Был да үҙенә күрә ҡанатландырып ебәрә ине.

Бөгөн инде иркен, газ үткәрелгән өйҙә, үҙ өйөмдә - үҙ көйөм, тип, ергә ныҡлы баҫып йәшәйбеҙ. Балаларым өйҙә булһа ла, урамда булһа ла кинәнеп уйнай, шаяра, уларҙы тауышланмағыҙ, етер, тип тыйыусы, ҡала йорттарындағы кеүек аҫтан да, өҫтән дә, эргәнән дә, тауышланмағыҙ, тип стена ҡағыусы күршеләр юҡ. Иркенләп, рәхәтләнеп шаяралар.

Әлбиттә, ауырлыҡтар ҙа булды, әле лә аҙым һайын осрап тора. Шулай уҡ аҡса тотона белеү ҙә, һаҡсыллыҡ та кәрәк. Ҡайһы бер ваҡыт теге йәки был әйберҙе бик-бик алғы килгәндә лә, тыйылырға, теләккә баш булырға тура килә. Бөгөн ҡайһы берәүҙәрҙең тун өҫтөнә тун алыштырып, ҡиммәтле сит ил машиналарында елдереп, үҙҙәре меҫкен булып ике-өс балаһы менән дөйөм ятаҡта, йә ат хаҡы түләп, ҡуртымға фатир алып йәшәүен аңлай алмайым. Эйе, беҙҙең улар менән ярышырлыҡ тундарыбыҙ, машиналарыбыҙ юҡ, уның ҡарауы, үҙебеҙҙең еребеҙ, үҙебеҙҙең өйөбөҙ, үҙебеҙҙең ожмах оябыҙ бар! Ошо үҙе бәхет түгелме ни?..

Шуға ла йәштәргә теләгем шул: хәҙер шарттар беҙҙең замандағы кеүек түгел, тырышлыҡ булғанда, маҡсаттарға өлгәшеүе еңелерәк, бары тик ауырлыҡтарҙан ҡурҡмаҫҡа, маҡсаттарға ынтылырға кәрәк! Әйҙәгеҙ, мөмкинлектән файҙаланып, ер алайыҡ та, өй һалайыҡ, милләттәштәр!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## *ХӘТЕРКИТАП*

# ХӘҘЕРГЕ ИРҘӘР...

## шпиондарҙан һаҡлаймы төбәген?

**Әсәйебеҙ мине һәм Дамир ағайҙы иртәнсәк уятып, һыйырыбыҙҙы көтөүгә ҡыуырға ҡуша торғайны. Беҙ, билдәле, йоҡобоҙ килһә лә, һәр көн иртән малдарҙы билдәләнгән урынға ҡыуабыҙ. Шундай иртәләрҙең береһе айырыуса ныҡ хәтерҙә ҡалған...**

Тағы ла уяттылар... Киләбеҙ... Малдар, гүйә, үҙҙәренең артынан ике малай эйәреп барыуын күрмәй ҙә, һиҙмәй ҙә: һәр ваҡыттағыса, үҙҙәре генә белгән юл менән бара бирә. Их, тағы берәр сәғәт серем итеп алғанда, тип уйлайым эстән, ләкин беҙҙе лә, малдарҙы ла хужалар - атай менән әсәй - оҙаҡ йоҡлатамы ни инде...

Мал йыйылып торған урынға - мөгәҙәй тапҡырына барып еткәндә инде тулыһынса йоҡобоҙҙан уянған, әҙәм рәтенә ингән булабыҙ. Бөгөн дә тейешле урынға килеп еттек тә, ни күҙебеҙ менән күрәбеҙ: мал ҡыуырға килгән ир-ат ҡысҡырыша, һай-һайлай бит. Ҡолаҡтарҙы ҡарпайтып, улар янына йүгерешеп барып еттек. Был ни хәл? Фәйзрахман, Ғәли, Мөбәрәк ағайҙар һәм тағы бер-нисәү ерҙә ятҡан бер кешене типкеләй, асырғанып һүгепме-һүгәләр. Араларындағы берәү: "Немец шпионы беҙҙең ауылғаса килеп еткән, беҙҙең колхозды тикшереп йөрөй. Беҙ шпиондарға иркенлек бирмәбеҙ! Туҡмағыҙ туйғансы!" - тип һөрән һала. Беҙ ерҙә ятҡан кешене бер аҙ йәлләһәк тә, шпион һынлы шпионды тотоп типкеләгән ир-егеттәрҙең батырлығына, көсөнә ҡарап, ҡыуанышып торабыҙ. Бына ағайҙар дүртәүләп теге "шпион"дың ике ҡулынан, ике аяғынан тотоп, ауыл советына ҡарай алып киттеләр. Беҙ ағайҙарҙың артынан ҡыуана-ҡыуана атлайбыҙ...

Ул ваҡытта ауыл советы рәйесе булып беҙҙең атайыбыҙҙың ҡустыһы Бикбирҙин Рәхмәтулла Сәфәрғәле улы эшләй ине. Ирҙәр һөрләгөшөп контораға инеп китте лә, күп тә үтмәне, ҡабат килеп тә сыҡтылар. "Ни эшләп беҙ, ахмаҡтар, Түбә ҡасабаһынан килгән урыҫты аңын-тоңон белмәй туҡмап ташлағанбыҙ?" - тип аптыраша ағайҙар. Баҡтиһәң, был урыҫ Магнитогорск ҡалаһына байыҡтырылған алтын мәғдәнен йөк автомобиленә тейәп алып китеп барған икән. Беҙҙең ауыл мөгәзәйенән араҡы алып эскән дә, иҫереп, машинаһын таба алмай йөрөп-йөрөп, мөгәзәй янында йоҡлап киткән икән. Ә беҙҙең ағайҙар уны "немец шпионы" тип уйлаған...

Бер ағайыбыҙ шунда уҡ был урындан тайыу яғын ҡараны, ә ҡалғандар теге урыҫтың сыҡҡанын көтөп тора башланы. Сит кеше аҡһай-аҡһай килеп сығыу менән хәлдең үтә хөрт булыуы аңлашылды: туҡмалыусының күҙ төптәрен ҙур шештәр ҡаплаған, сәсендә әле ҡатып та өлгөрмәгән ҡуйы ҡан, бер яҡ ҡабырғаһын тотоп, аҡһаңҡырап атлауына ҡарағанда, ҡабырғалары ла имгәнгән булыуы мөмкин. Артынан рәйес сыҡты. Ирҙәр яғына һөҙөп ҡараны ла: "Ғәфү үтенегеҙ, төрмәгә эләккегеҙ килмәһә!" - тине һәм шоферҙың бер ниндәй ҙә ғәйебе юҡлығы тураһында тағы бер тапҡыр хәтерҙәренә төшөрөп, өҫтәп ҡуйҙы: "Иҫерек кешенең мығырлауын аңламай, немецсә һөйләй, тип уйлағанһығыҙ бит!" - тине. Ирҙәр ипләп кенә, ауыҙ эсенән: "Ғәфү ит", - тиештеләр. Рәйес ағайға был оҡшаманы. Ул тағы ла ҡыҙа башланы: "Әгәр төрмәгә эләккегеҙ килмәһә, матур итеп ғәфү үтенегеҙ!" - тип ҡысҡырҙы ул тағы ла уҫалыраҡ итеп. Шул саҡ бер тауыштан: "Прости нас..." - тигән өндәшеү яңғыраны. Шунан һуң ғына мәғдән ташыусы йөҙөндә йылмайыуға оҡшаш һыҙаттар күренеп ҡалғандай булды. Ул шулай ҙа бөтөнләй асылып та китмәне, бары тик: "Колхоз контр-разведчиктары! Һеҙҙе нимә эшләтергә? Ну, ярай..." - тине лә, ҡатлы-ҡатлы һүгенеп, Рәхмәтулла ағайҙың артынан эйәреп, уларҙың йортона ҡарай китеп, күҙҙән юғалды.

Был ваҡиғанан һуң әллә нисә тапҡыр иртән мал ҡыуҙыҡ, теге "шпион" йоҡлап ятҡан урынды гел барып ҡарар булдыҡ тәүҙә. Әммә шофер беҙҙең ауыл янында ла, хатта күрше Туҡтағол ауылы тирәһендә лә бүтәнсә күренмәне - урап үтте буғай беҙҙең тирәне. Бәлки, беҙҙең яҡ ирҙәренең үтә уҫал булыуы ла һағайтҡандыр уны...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Оҙаҡ ҡына ваҡыт был ваҡиғаны онота алмай йөрөнөм. Бөгөн дә иҫкә төшә ул хәл. Иҫкә төшә лә, ысынлап та ауылын "шпиондарҙан" яҡлаған ағайҙар һағындыра. Ә бөгөнгө ир-егеттәр көтөү ҙә ҡыумай, ауыл малына ҡул һуҙыусыларҙы ла эҙәрләмәй, яуыз әҙәмдәрҙән төйәген, ғаиләһен һаҡлау тураһында ла уйламай... Бына шул әсендерә йөрәкте...**

**Самат БИКБИРҘИН.**
**Баймаҡ районы Темәс ауылы.**

## *БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТТАР РӘСӘЙ ХЕҘМӘТЕНДӘ

**Башҡорт ғәскәрҙәре һәр саҡ ҡәтғи тәртибе, етеҙлеге менән айырылып торған һәм меңгә, йөҙгә, иллегә, унға бүленгән. Улар менән башлыҡтар, йәғни командирҙар етәкселек иткән. Башҡорт ғәскәрҙәренең хәрби тактикаһында төп урынды һыбайлылар алып торған.**

XIII-XVI быуаттарҙа башҡорттар монгол хандарының ғәскәренә хәрбиҙәр һәм аҙыҡ-түлек запасы биреп торорға тейеш булған. XVI быуатта башҡорттар тарихында ҙур үҙгәреш була - Башҡортостандың Европа өлөшө Рус дәүләте составына инә. Башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы таныла, ләкин улар батшаға яһаҡ түләргә һәм үҙ иҫәбенә хәрби хеҙмәт үтергә тейеш була. Ләкин рекрут йыйыуҙарынан азат ителәләр һәм регуляр ғәскәр булып иҫәпләнмәйҙәр. Хәрби хеҙмәт башҡорттар өсөн даимиға әүерелә һәм эске һәм тышҡыға бүленә. Эске хеҙмәттең төп формаһы булып илдең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлау була. Тышҡы хеҙмәт иһә башҡорт атлыларының Рәсәйҙең башҡа дәүләттәр менән алып барған һуғыштарҙа ҡатнашыуында сағыла.

Тарихи сығанаҡтар раҫлауынса, башҡорттар Рус дәүләте составына инеү менән үк төрлө һуғыштарҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, Ливон һуғышында, поляктарға һәм шведтарға ҡаршы һуғышта, Сыуалыш (Смута) ваҡытында, Азов походтарында, Төньяҡ һуғышында ҡаһарманлыҡтар күрһәтә. 1756-1763 йылғы Ете йыллыҡ һуғышта башҡорт һәм мишәр кавалерия отрядтары ҡатнаша. 1758 йылда Ҡытайҙың һөжүм итеү ихтималлығынан хәүефләнеп, башҡорт һәм мишәр отрядтары Рәсәй-Ҡытай сиген һаҡларға оҙатыла. 1771 йылда Екатерина Икенсе башҡорт ғәскәренән өс мең кешене Польшаға, конфедераттарға ҡаршы һуғышыусы рус армияһына ярҙамға ебәрергә бойора. 1790 йылда мишәрҙәр һәм Ырымбур казактары менән бергә ике мең самаһы башҡорт Балтика буйына, М.И. Кутузов командалағындағы армияға ебәрелә. Батша хөкүмәте өсөн башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең хәрби хеҙмәте бик отошло була, сөнки полктар төҙөгәндә улар бер ниндәй матди сығым да сығармай, был халыҡтар ғәскәрҙе үҙе ойоштора, үҙе матди яҡтан тәьмин итә. XVIII быуат һуңында башҡорттарҙың хәрби хеҙмәте дөйөм күренешкә әүерелә. Кантон системаһы индерелеүе һәм башҡорттарҙы һәм мишәрҙәрҙе хәрби-казак ҡатламына күтәреү ҡаты хәрби режимды нығытыуҙы аңлата. Барлыҡ казактар өсөн билдәләнгән утыҙ йыллыҡ хәрби хеҙмәт башҡорттар өсөн дә мотлаҡҡа әүерелә. Улар араһынан оҙаҡ ваҡыт хеҙмәт иткән, хәрби ҡаҙаныштарға эйә булған командир кадрҙары әҙерләнә. Улар иррегуляр ғәскәрҙәрҙең дәрәжәһенә: зауряд-хорунжий, есаул, зауряд-сотник һ.б. эйә була. Наполеонға ҡаршы һуғышта бишәр йөҙ атлынан торған полктар киң тарала. Беренсе Ватан һуғышында башҡорттарҙың егерме һигеҙ полкы ҡатнаша. Давыдовтың, Сиславиндың, Ефремовтың, Ҡудашевтың һәм башҡаларҙың отрядтарында Башҡортостандан сыҡҡан ике партизан полкы була. Шулай уҡ башҡорттар рус ғәскәрҙәре составында сит ил походтарында ла ҡатнаша.

Беренсе Ватан һуғышынан һуң башҡорттар 1828 - 1829 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында ла ҡатнаша. Уның башынан уҡ Тирасполгә сик буйы хеҙмәтен үтәү өсөн ике башҡорт полкы оҙатыла. 1853 - 1856 йылғы Ҡырым һуғышында дүрт башҡорт полкы була. Севастополде оборуналау башҡорт хәрбиҙәре араһында бик күп батырҙарҙы асыҡлай.

Күреүебеҙсә, йөҙәр йылдар һуҙымында башҡорттар Рәсәй дәүләте ҡатнашҡан бер һуғыштан да ситтә ҡалмай. Күп юғалтыуҙар кисерә. Хәрби ведомство башҡорттарҙың борон-борондан яҡшы атлы ғәскәр булыуын иҫәпкә алып, махсус атлы эскадрон ойоштора. 1778 йылда эскадрондар һаны дүрткә етә. Улар базаһында 1882 йылға тиклем башҡорт полкы эшләй. Тап шул йылдан башҡорт хәрби формированиелары эшләүҙән туҡтай. Башҡорттар башҡалар менән бер рәттән дөйөм нигеҙҙә хәрби хеҙмәт үтә башлай.

✓ *Йәштәрҙең эшкә өйрәнмәүенең тәрбиәнән, донъя үҙгәреүенән тыш, икенсе бер төп сәбәбе бар. Ул да булһа, үҙкиммәт мәсьәләһе. Хәҙер ауылда мал тотмаусы ғаиләләр ҙә барлыҡҡа килә.*



# ИТӘК ҠЫРҠЫП

## Ә итәк бөтһә,

**Бер кемгә лә сер түгел: хәҙерге ваҡытта илебеҙ, асылда, донъяның башҡа илдәренә сеймал һатып көн итә. Европаға, күрше дәүләттәргә йыуан-йыуан торбаларҙан нефть, газ йылдар әйләнәһенә генә түгел, быуаттар әйләнәһенә ағыла. Совет осоронда социалистик режимды тотор өсөн ярты донъяны яғыулыҡ сеймалы менән бушлай тиерлек тәьмин иттек. Һөҙөмтәлә нимә килеп сыҡты: беҙҙең тауарҙар донъя баҙарында конкурентлыҡҡа һәләтле түгел, имеш. Совет осоронда аяҡҡа баҫтырылған ауыл хужалығы емерелде, сәнәғәт предприятиелары ҡыйралды, һуңғы самолеттар ергә ҡолап төшә, һуңғы кораблдәр һыу төбөнә китә, һ.б. Ошондай шарттарҙа илебеҙ, үҙгәртеп ҡороуҙар башланған үткән быуаттың 90-сы йылдарынан алып, һаман да бер урында тапана кеүек. Төрлө кимәлдә башланған реформалар тормошҡа ашыу түгел, хатта ошо маҡсатта ил ҡаҙнаһынан бүленгән аҡса ла тейешле урынға барып етмәйенсә, ҡайҙалыр юғалып ҡала. Нисек кенә булмаһын, илебеҙ киләсәге туранан-тура иҡтисадҡа бәйле булғаны һүҙһеҙ ҙә аңлашыла. Шуға ла бөгөн илебеҙ яҙмышына битараф булмағандар "Беҙгә ни эшләргә?" тигән һорау өҫтөндә баш вата. Ғалимдар, белгестәр генә түгел, ябай хеҙмәткәрҙәр ҙә ил, милләт ғәме менән йәшәй. Иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент Илдар ҒӘБИТОВ менән Өфө дәүләт авиация техник университеты техник хеҙмәткәре Хәмит МӨХӘММӘТЙӘРОВ та ошо һорауҙарға яуап эҙләй.**

**Әгәр ҙә илебеҙ киләсәген тәьмин итер сеймал иҫәбенә йәшәй бирһәк, берҙән-бер көндө беҙҙең балалар, ейән-ейәнсәрҙәр, бүлә-бүләсәрҙәр беҙгә: "Атайҙар, ҡартатайҙар, беҙҙең өлөштө ҡайҙа иттегеҙ? Ниңә беҙгә бер нәмә лә ҡалдырманығыҙ, ниңә беҙҙең өлөшкә индегеҙ?" - тиһә, уларға нимә тип яуап бирербеҙ һуң?**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** 1991 йылдан башлап мин үҙ илемдең патриоты түгел. Сөнки тап шул саҡтан башлап илебеҙ халҡы 70 йылдан ашыу туплаған байлыҡты һатыу башланды, шуның иҫәбенә миллионерҙар, миллиардерҙар барлыҡҡа килде. Ошондай сәйәсәт үткәргән илдең патриоты булыр өсөн кәмендә башһыҙ маңҡорт булырға кәрәк. Беҙҙе тап шулай итеп күрергә теләйҙәр ҙә, паспортыбыҙҙан милләт графаһын алып ташлау ҙа ошо хаҡта һөйләй. Был сәйәсәттең маҡсаты - Рәсәйҙә йәшәүсе милләттәрҙән винегрет яһау. Ни өсөн ошолар хаҡында һөйләйем һуң? Сөнки илдең иҡтисады ла унда йәшәүсе граждандарҙың, милләттәрҙең тормош-көнкүрешен яҡшыртыу маҡсатында түгел, ә айырым төркөмдәрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында үҫтерелә. 70 йыл буйы илебеҙ халҡы туплаған байлыҡты айырым кешеләр үҙ ҡулына төшөргәс, халыҡ бөтөнләй өлөшһөҙ ҡалып, өлгөрөрәктәре ҡалған биналарҙы, трактор-машиналарҙы, ҡоймаларҙы, тимер сымдарын тимер һынығы итеп тапшырып, сит ил машиналарында елдерергә тотондо. Үҙгәртеп ҡороу ошоноң өсөн генә кәрәк булдымы ни беҙгә?

**И. ҒӘБИТОВ:** Сәнәғәт совет осоронда ил иҡтисадының 70 процентын тәшкил итә ине. Хәҙер ул егерме процент тирәһе. Дөрөҫөн әйткәндә, илебеҙ оло баҙар майҙанына әүерелде. Беҙ, образлы әйткәндә, үҙкиммәте өс һум торған ҡәләмде баҙарҙа мең һумға һата ала торған илдә йәшәйбеҙ. Ошонан сығып, ниндәйҙер иҡтисад үҫеше хаҡында һүҙ йөрөтөп буламы? Тауар етештермәйенсә тороп, нисек илде күтәрергә була?

Өҫтәмә хаҡ нисек барлыҡҡа килә һуң? Әгәр ҙә ул етештереүсе тарафынан ҡуйылһа, сәнәғәт үҫешер ине, юҡ, өҫтәмә хаҡты сауҙа, баҙар ҡуя. Бөгөн туризмды үҫтереү хаҡында һүҙ алып барыла. Яҡшы, кеше ял итергә лә тейеш. Тик хәҙерге заманда кемдәр ял итә ала һуң? Әлеге лә баяғы байҙар, тап уларҙың мәнфәғәтен күҙәтеү маҡсатында туризм үҫешә. Тропик илдәрҙә, мәҫәлән, шәкәр ҡамышы баҫыуҙарын юҡҡа сығарып, унда пальма үҫтереп, туристик зоналар әҙерләйҙәр. Ошо юл менән кемдеңдер йәшәү сығанағы булған ерҙе тартып алып, унда байҙарҙы ял иттерәләр. Беҙҙә ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырмайынса тороп, туризмды үҫтереү хаҡында һүҙ алып барырға мөмкинме? Сит ил граждандарына алабута, кесерткән баҫҡан баҫыуҙарҙы күрһәтәйекме?

**Ауыл хужалығын нисек күтәрергә була, тип уйлайһығыҙ? Колхоз-совхоздар емерелеп бөттө, фермерлыҡ үҙен аҡламаны…**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Беҙ ошоғаса Сталин төҙөгән ил моделе буйынса йәшәнек. Ул ил тик социализмда йәшәр өсөн генә яраҡлаштырылғайны. Хәҙер килеп, капитализм төҙөйбөҙ, тигән булабыҙ, тик илебеҙ генә юҡ. Троцкий, мәҫәлән, Рәсәйҙе индустрияһыҙ "гулагтарға" бүленгән ил итеп күрергә теләгән. Ә ни өсөн аҡгвардиясылар, интервенттар Советтар еренән китә? Улар беҙҙән Ҡыҙыл Армия еңгән өсөн түгел, бындай илдең киләсәге булмаған өсөн китә. Сөнки улар шул саҡта уҡ барыһын да аңлай. Троцкийҙың планы буйынса, Рәсәй шул саҡта уҡ Американың һәм донъя капиталының сеймал сығанағына әүерелергә тейеш була.

**И. ҒӘБИТОВ:** Беҙҙең ил иҡтисад яғынан конкурентлыҡҡа һәләтле түгел, һәләтле булманы һәм булмаясаҡ та. Сөнки донъяла Монголиянан ҡала иң һыуыҡ ил - ул Рәсәй. Беҙҙең илдә ҡыш көнө кешегә йылы шарттар тыуҙырыр өсөн генә лә ил байлығының 40-50 процент самаһы китә. Йылы йорттар төҙөр өсөн күпме кирбес, газ, ташкүмер, электр энергияһы, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, һ.б. сеймал кәрәк. Мәҫәлән, Испания, Италия илдәре, Америка һәм донъяның башҡа алға киткән илдәрендә үҙәкләштерелгән йылытыу селтәрҙәре юҡ. Беҙҙең һыуыҡ ҡышты йылытыр өсөн ил байлығының байтағы китә. Бөгөн килеп илебеҙ шул ВТО ойошмаһына инергә ниәтләнә һәм был аҙым беҙҙең барлы-юҡлы ҡаҙаныштарыбыҙҙы юҡҡа сығарасаҡ. Был ойошмаға Греция ла инде һәм уларҙың тәртибе буйынса йәшәй башлағайны, быға тиклем бар донъяға караптар һәм суднолар төҙөү буйынса данлыҡлы илдең иҡтисады емерелеп, бер туризмға ғына таянып тороп ҡалды.



**Рәсәй донъя капиталының сеймал базаһы ғына була ала, тип әйтмәксеһегеҙме, улай булғас?**

**И. ҒӘБИТОВ:** Тик шулай. Беҙ, ысынлап та, киләсәк иҫәбенә йәшәйбеҙ. Бер ил икенсе илдән бурысҡа кредит алһа, уны бөтә ил халҡы тиҫтәләгән йылдар буйына түләй. Бында ла шул уҡ бурысҡа йәшәү килеп сыға. Бынан бер ҡайҙа ла китеп булмай, был - ысынбарлыҡ. Беҙгә бөгөн сит илгә ағасты эшкәртелгән материал итеп түгел, үҫеп ултырған ағас көйө һатыу отошлораҡ. Улай ғына түгел, хатта нефть продукттарын сит илгә сығарып һатыуға ҡарағанда, ер ҡуйынынан сыҡҡанын һатыу файҙалыраҡ. Хәҙер хатта барлыҡ нефть заводтарын ябырға кәрәк, тигән фекер әйтеүселәр ҙә бар. Ни өсөн тигәндә, әйтәйек, Себерҙә табылған нефтте Өфө нефть эшкәртеү заводына алып килеп эшкәртеү сығымдары, ғөмүмән, үҙебеҙҙә табылған нефтте үҙебеҙҙә үк эшкәртеү үҙен-үҙе аҡламай. Беҙҙә сыҡҡан мазутты ғына көнбайыш илдәре беҙҙән һатып алып, төрлө-төрлө продукциялар яһап, кире үҙебеҙгә һата. Беҙҙәге алыҫ аралар, юлдарҙың насар булыуы, техниканың насар торошо продукцияның үҙкимməтен ныҡ күтәреп, һөҙөмтәлелекте юҡҡа сығара. Мин Төмәндә нефть табылған урындарҙа булып ҡайттым. Унда һаҙлыҡтар аша тимер юлдар һалына һәм шул юлдарҙы һалыу өсөн ҡырсынташты беҙҙән ташыйҙар. Нефть вышкаларын ултыртыу өсөн һаҙлыҡтар эсендә яһалма утрауҙар төҙөү өсөн генә лә әллә күпме материал һәм ҡул көсө талап ителә. Ә бит былар барыһы ла шул уҡ табыласаҡ нефттең үҙкиммәтен тәшкил итә. Әгәр ҙә беҙ ошондай шарттарҙа Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инһәк, нимә килеп сығасаҡ, тип уйлайһығыҙ? Ундай үҙкиммәтле нефть сәнәғәте һәм унда эшләүселәр берәүгә лә кәрәк булмаясаҡ. Әлеге ваҡытта күмер табыу сәнәғәтенең дә беҙгә кәрәк булыу-булмауы хаҡында һөйләй башланылар.

*Үкенескә ҡаршы, һуңғы егерме йыл эсендә ауыл да деградацияға дусар ителде. Хәҙер ауылда ниндәйҙер артелдә йә колхозда түгел, хатта үҙенең шәхси хужалығында ла ҡыл да ҡыбырҙатмаған төркөмдәр барлыҡҡа килде. Көрәк тә тотоп эшләй алмаҫлыҡ ҡырҡ йәшлек ирҙәр бар хәҙерге ауылда. Шул уҡ ваҡытта совет осоронда бил нығытып ҡалған тағы бер төркөм йәшәй ауылда, әммә улары әллә ни күп түгел. Ана шул быуын донъялыҡтан китеп барыу менән ауылдарҙың үҙенән-үҙе юҡҡа сығыу ҡурҡынысы ла бар.*

Ошондай шарттарҙа беҙҙең илдең киләсәген шунда күрәләр: күпселек халыҡ натураль хужалыҡ итеүгә күсергә тейеш. Йәғни ул осраҡта беҙгә нефть скважиналары эшләһен өсөн яҡынса алғанда 20 мең самаһы операторҙар һәм һаҡсылар кәрәк буласаҡ.

**Рәсәй тарихы буйынса шул да мәғлүм: иң ауыр ваҡытта илде ауыл ҡотҡарып ҡалған. Был йәһәттән ауылға ниндәй өмөттәр бағлап була тип уйлайһығыҙ?**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Үкенескә ҡаршы, һуңғы егерме йыл эсендә ауыл да деградацияға дусар ителде. Хәҙер ауылда ниндәйҙер артелдә йә колхозда түгел, хатта үҙенең шәхси хужалығында ла ҡыл да ҡыбырҙатмаған төркөмдәр барлыҡҡа килде. Көрәк тә тотоп эшләй алмаҫлыҡ ҡырҡ йәшлек ирҙәр бар хәҙерге ауылда. Шул уҡ ваҡытта совет осоронда бил нығытып ҡалған тағы бер төркөм йәшәй ауылда, әммә улары әллә ни күп түгел. Ана шул быуын донъялыҡтан китеп барыу менән ауылдарҙың үҙенән-үҙе юҡҡа сығыу ҡурҡынысы ла бар.

**И. ҒӘБИТОВ:** Ауылда йәшәүсе йәштәр араһында утын яра белеү ҙә хәҙер һирәк күренешкә әүерелеп бара. Ауылдағы ошондай күңелле булмаған хәл-күренештәр хаҡында уйланһаң, элекке ауылды күҙ алдына килтерһәң, уйылып китерлек. Әммә йәштәрҙең эшкә өйрәнмәүенең тәрбиәнән, донъя үҙгәреүенән тыш, икенсе бер төп сәбәбе бар. Ул да булһа, үҙкиммәт мәсьәләһе. Хәҙер ауылда мал тотмаусы ғаиләләр ҙә барлыҡҡа килә. Дөрөҫөн әйткәндә, магазиндан һатып алған аҙыҡ-түлек үҙең етештергәнгә ҡарағанда күпкә арзан булған саҡта, ниңә мал тотоп ыҙаланырға һуң? Бына хәҙер ниндәй йүнәлеш ала башланы ауыл иҡтисады.

**Барыбер ҙә кешелектең, милләттәрҙең сәңгелдәге булған ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу зарури. Кемдер унда донъя ҡорорға, мал үрсетергә, иген игергә тейештер бит. Шулай түгелме һуң? Ғөмүмән, хәҙерге ваҡытта ауылда үҙ көсөң менән эшләп, капитал туплап буламы?**

**И. ҒӘБИТОВ:** Күптәр хәҙер бәләкәй ауылдарҙан эре ҡасабаларға, район үҙәктәренә, баш ҡалаға, Мәскәүгә, сит илгә йәшәргә күсә. Бында маҡсат аңлашыла: ҡала ни тиклем ҙурыраҡ булған һайын, унда эш, аҡса табыу мөмкинлеге лә күберәк. Хәҙер колхоз-совхоздар бөткәс, ауылдарҙа иген сәсергә, мал көтөргә, бесән сабырға буш урындар күбәйҙе. Теләһәң, әллә күпме мал тоторға була. Әммә кеше һыйырҙы ике баштан артыҡ тотмай, шул хаҡта уйлап ҡарағанығыҙ бармы? Сөнки малды артыҡ тотоу ауыл кешеһенә табыш килтермәй, түккән көсө әрәмгә генә китә. Ауылда хәҙерге ваҡытта тик күмәкләп эшләп кенә ниндәйҙер маҡсатҡа өлгәшеп була. Йә булмаһа, Латин Америкаһындағы кеүек латифундиялар төҙөү, бының өсөн байҙарҙың капиталын йәлеп итеү урынлы булыр ине. Был да шулай уҡ күмәкләп эшләү төрө. Яңғыҙың һин игенселек менән дә, мал үрсетеү менән дә мандып китә алмаясаҡһың. Яңғыҙ кеше үҙенә, ашарына-эсеренә етерлек кенә эшләй ала ауылда. Хәҙерге ваҡытта ауылға ҡарата үткәрелгән иҡтисади сә-

йәсәт унда йәшәүселәргә әҙәмсә йәшәү мөмкинлеге бирмәй әлегә.

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Совет осоронда колхоз-совхоздар, иҡтисади яҡтан файҙаһы әҙерәк булһа ла, ауыл кешеһен эшле итер өсөн кәрәк булған. Хәҙер ауылды күтәрәм тиһәң, унда газға һәм электр энергияһына хаҡты төшөрөү мөһим. Минең Ҡырмыҫҡалыла йәшәүсе әсәйем газға ғына айына ике мең һум түләй. Ә бына Өфөлә йәшәүсе мин ике бүлмәле фатирымдағы шундай уҡ майҙанға тотош коммуналь хеҙмәттәр өсөн айына мең ярым түләйем. Айырманы һиҙәһегеҙме? Көнкүреш химияһы ла Өфөлә ауылға ҡарағанда ике тапҡыр самаһына осһоҙ. Шуға күрә мин әсәйемә ҡайтҡан һайын төрлө тауарҙар тейәп алып ҡайтам. Бөгөн ауыл ерендә йәшәү файҙаһыҙ хатта.

**▸ Һеҙҙең әйткәндәрҙе тыңлаһаң, киләсәгебеҙгә бер ниндәй ҙә ышаныс ҡалмай. Ә ышаныслыҙ нисек йәшәргә һуң, улай булғас?**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Ундай ышаныс булыр ине, әгәр кеше илдең барлығына ышанһа. Күптәрҙең сит илгә бәхет эҙләп ҡом, йәшеллек, ағастар үҫә һалмай. Шуға күрә үҙебеҙҙең подъезд алдын йәшелләндереү маҡсатында ауылдан тупраҡ алып килеп, үлән, сәскәләр сәсеп, ағастар ултыртып ҡараным, Уралтауҙың матур таштарын алып килеп, Альп тауҙары өйҙөм. Ниәтем килеп сыҡманы, емереп-ватып, таштарын урлап бөтөрҙөләр. Кешелә ер тойғоһоноң юҡҡа сығыуына уны шәхси милек итеп иғлан итеү ҙә ҙур роль уйнағандыр. Үҙегеҙ беләһегеҙ, йәйҙәрен Әбйәлил, Белорет районы урмандары яна башлағас, урындағы халыҡ уны һүндереүгә дәррәү ҡушылманы. "Урманыбыҙҙы һатҡандар, ул беҙҙеке түгел, кемдеке, шулар һүндерһен", ти урында йәшәгән халыҡ. Улар бит дөрөҫ әйтә. Әгәр ҙә ер дөйөм милек булһа, халыҡ күңелендә уның хаҡында дөйөм хәстәрлек тойғоһо булыр ине. Минеңсә, ергә дөйөм милек итеп ҡарау экономлыраҡ та. Ни өсөн тигәндә, һәр кем үҙенең пай ерен кәртәләй башлаһа, был күпме мәшәҡәт тыуҙырып, күпме сығымдар талап итер ине.

**▸ Еребеҙҙең ҡәҙерһеҙлеге уның иркенлегенән килмәйме? Ә бит алдағы йылдарҙа һатып алыусы уны мөмкин тиклем арзанайтырға ынтыла. Баҙарҙың асылы ошонда. Ерҙең ҡәҙерһеҙләнеүе лә уны һатып алыусының бер хәйләһе генәлер. Ул төрлө юлдар менән кеше күңелендә ергә ҡарата ятһыныу тойғоһо тәрбиәләп, асылда, уны осһоҙландыра. Уның төп маҡсаты ерҙе күмәртәләп осһоҙ хаҡҡа һатып алып, аҙаҡ донъя капиталына мең тапҡыр арттырып һатып аҡса эшләү. Һатып алыусының һәм һатыусының тәртибе бар урында ла оҡшаш. Ҡыҫҡаһы, әлеге ваҡытта ерҙе осһоҙландырып, тауар итергә әҙерләйҙәр. Хәҙер кеше алыпһатарлыҡ юлы менән еңел генә аҡса эшләргә өйрәнеп алды.**

**▸ Нимә генә булмаһын, беҙ Ер шарынан бер ҡайҙа ла сығып китә алмаған һымаҡ, баҙар иҡтисадынан да бер ҡайҙа ла китә алмайбыҙ. Шулай түгелме?**

**И. ҒӘБИТОВ:** Баҙар нимә ул? Сауҙа итеү, тауар һатыу һәм һатып алыу йә алмаштырыу урыны. Урыҫса әйткәндә, обмен-обман. Башҡортса алмашыу-алдашыу. Баҙарҙа һатыусы ла, һатып алыусы ла бер-береһен алдарға тырығанлыҡты тарҡата. Капитал кешеләрҙе бер-береһе менән дошманлаштыра, ҡатламдарға бүлә. Элек-электән атай-олатайҙарыбыҙ кемдеңдер ҡулына күпмелер аҡса килеп инеүен насарға юраған һәм дөрөҫ эшләгән. Беҙҙә ҡайһы бер кешеләр хаҡында "йәшәй белә" тип әйтәләр. Ә бит ошо һүҙҙең артында уның урлаша белеүе, башҡа кешеләр иҫәбенә йәшәүе лә йәшеренгән, тик уныһын ғына әйтмәйҙәр.

**▸ Беҙ иҡтисадтың Америка моделен ҡабул итә алмайбыҙ, сөнки иҡтисади көрсөк ул моделдең тотороҡло булмауын күрһәтте. Ә ниндәй моделде һайларға һуң беҙгә?**

**И. ҒӘБИТОВ:** Беҙгә һатыуҙан килгән табышты иҡтисадты үҫтереүгә йүнәлтә торған юл кәрәк. Бының өсөн кем етештерә, өҫтәмә хаҡты шул алырға тейеш, ә алыпһатар түгел. Иҡтисад был осраҡта талпан йәбешеп йонсоған мал кеүек, күпме генә ашамаһын, ҡанын талпан-алыпһатар һурып тик тора.

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Һуңғы ваҡыт торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҙгәртеп ҡороу хаҡында һүҙ алып барыла. Беҙ ул итер өсөн балалар баҡсаһы тәрбиәсеһенә бирә. Тәрбиәсе - табибҡа, табиб - юл хәрәкәте инспекторына, инспектор сантехникҡа бирә. Йәғни был схемала тауар етештерелмәгәс, бер кем дә байымай, аҡса билдәле түңәрәк буйлап әйләнештә тик йөрөй. Ҡыҫҡаһы, аҡса, ришүәт кеше араһын шул тиклем боҙа.

Ике грузин крәҫтиәне арҡаларына турһыҡ артмаҡлап, йәйәүләп ҡалаға шарап һатырға киткән, ти. Юлда ашап алғандар. Шунан береһе: "Әйҙә, берәр стакан шарап эсеп алайыҡ", - тип тәҡдим иткән. Тегеһе, юҡ, беҙ аҡса һуғырға барабыҙ бит тип баш тартҡан. Шунда тегенеһе кеҫәһендә ятҡан 5 һум аҡсаны биреп, үҙенә бер стакан шарап ҡойҙороп эскән. Бер аҙ барғас, тегеһе 5 һумды кире ҡайтарып, бынының шарабын тәмләп ҡараған. Был сауҙа уларға оҡшап ҡалған. Шулай итеп, улар баҙарға барып еткәнсе береһе икенсеһенең турһығын бушатҡан һәм береһенең ҡулында 5 һум аҡса ғына тороп ҡалған. Был баҙар иҡтисадының кешене бөлгөнлөккә төшөрөүен күрһәткән риүәйәт. Ошо 5 һумлыҡ аҡса

# ЕҢ ЯМАЙБЫҘМЫ?

## ни эшләрбеҙ һуң?

сығып китеүе лә ошо илдең киләсәгенә ышанмауҙан килә. Минә авиация университетында эшләүсе бер нисә профессор хаҡында һөйләнеләр. Уларҙың балалары күптән сит илдә йәшәй, үҙҙәре, беҙҙең республикала тыуып үҫкән булһалар ҙа, бында "вахта" ысулы менән генә эшләй, имеш. Улар үҙҙәре пенсияға сыҡҡансы ғына бында буласаҡтар.

Бөгөн кеше эшһеҙ, аҡсаһыҙ ҡалыуҙан ҡурҡып, энә осонда йәшәй. Совет осоронда беҙ был турала уйлап та бирмәнек. Сөнки гарантия бар ине. Ауыл кешеһе киң һулыш алып йәшәне. Брежнев заманында 162 миллион кеше бушлай фатир алған. Тик Брежнев заманында ғына ауыл кешеһе айлыҡ эш хаҡы алып йәшәп ҡалды. Ул саҡта юғары уҡыу йортонда доцент - 230, ә профессор 450 һум эш хаҡы алып эшләгән. Мин ул саҡта 8 тапҡыр Сочиға ял итергә барҙым. Бөгөн хатта магазинға тәртип һаҡсылары автомат менән килеп инә. Ә ул саҡта мин автоматты тик хәрби часта ғына күрә инем. Ул саҡта милиционер һыҙғыртҡыс менән генә йөрөй ине.

**И. ҒӘБИТОВ:** Олигархтар барлыҡ йәшәү һәм ял итеү шарттары булған йөҙөүсе утрауҙар төҙөй хәҙер. Улар Нух бәйғәмбәр кеүек Туфан һыуы ҡалҡыуға әҙерләнә, буғай. Был хәл шул турала ла һөйләй: кешелә ер тойғоһо юҡ хәҙер. Кеше ерҙе хәҙер сүп-сар һауыты урынына ғына күрә, унда нимәләр генә ташламай. Мин Сипайловола йәшәйем. Унда, беләһегеҙ, ҡом да

**Ер шарының халҡы йылдам артыуы һөҙөмтәһендә аҙыҡ-түлек етешмәй башлаясаҡ, тигән күҙаллауҙар ҙа бар...**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Беҙҙең бер Рамаҙанов Камил атлы егет июндә Германияға стажировкаға киткәйне. Шул яңыраҡ әйләнеп ҡайтты. Уға немецтарҙың ергә ҡарата мөнәсәбәте оҡшаған, улар ерҙең ҡәҙере белә, ти

*Үҙегеҙ беләһегеҙ, йәйҙәрен Әбйәлил, Белорет районы урмандары яна башлағас, урындағы халыҡ уны һүндереүгә дәррәү ҡушылманы. "Урманыбыҙҙы һатҡандар, ул беҙҙеке түгел, кемдеке, шулар һүндерһен", ти урында йәшәгән халыҡ. Улар бит дөрөҫ әйтә. Әгәр ҙә ер дөйөм милек булһа, халыҡ күңелендә уның хаҡында дөйөм хәстәрлек тойғоһо булыр ине. Минеңсә, ергә дөйөм милек итеп ҡарау экономлыраҡ та. Ни өсөн тигәндә, һәр кем үҙенең пай ерен кәртәләй башлаһа, был күпме мәшәҡәт тыуҙырып, күпме сығымдар талап итер ине.*

Камил. Юлда машина менән барғанда, туҡталып, машинаңдың капотын асыу ҙа ул илдә экологияға зыян килтереү тип баһалана икән. Йылғаға балыҡ тоторға барһаң да яр буйын тапап йөрөргә рөхсәт итмәйҙәр икән. Унда урам һепереүсе итеп тик немецтарҙы ғына алалар, сөнки үҙҙәренең ерен, урамын таҙартыу эшен сит кешегә ышанып тапшырмайҙар икән. Урам һепереүсе ошо эшен үҙенең илен, әсәһен яратҡан кеүек башҡара, ти.

**И. ҒӘБИТОВ:** Ерҙең ҡәҙерһеҙ булыуы, бәлки, иркенлектән дә киләлер. Икенсенән, һәр бер һатыусы тауарын ҡиммәтләндерергә тырышҡан һымаҡ, һәр бер



ша. Кем кемде нығыраҡ алдай, шул табыш ала. Әгәр ҙә унда ҡатнашыусы кемделер алдамаһа, файҙа ала алмай. Донъяла барған иҡтисади көрсөктөң нигеҙендә лә алдашыу ята. Америкала, көнбайыш илдәрендә ипотекаға хаҡты элек төшөргәйнеләр, хәҙер күтәрҙеләр, иҡтисади көрсөктөң төп сәбәбе лә ошонан килә. Хаҡты күтәреүселәр ошо юл менән кешене талап байырға ынтыла. Һөҙөмтәлә нимә килеп сығасаҡ? Көнбайыш илдәрендә күп кешеләр йортһоҙ тороп ҡаласаҡ. Ошонан шундай һығымта яһарға була: иҡтисади көрсөк Ер йөҙөндә ете миллиард кеше түгел, бер "алтын миллиард" кеше йәшәргә тейеш, тип эш итеүселәр тарафынан ойоштоpола.

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Дөрөҫ, был юл менән ерҙәге халыҡты ла кәметеп була, табыш та алырға була.

**И. ҒӘБИТОВ:** Баҙарҙы төп үҫеш стратегияһы итеп күреү шулай уҡ дөрөҫ түгел. Баҙарҙың төп принцибы: күберәк тауарҙы ҡиммәтерәк хаҡҡа һатыу һәм байығыу. Был осраҡта нәфсеңде тыйыу, күңел тыныслығы тигән төшөнсәләр ситтә тороп ҡала. Байлыҡ артынан ҡыуыу йәмғиәтте генә түгел, ғаиләләрҙе, туүҙгәреште хаҡтар артыуында тоябыҙ. Баҡтиһәң, хәҙер ундағы аҡсаларҙың да ҙур өлөшө Мәскәүгә китә икән. Ҡыҫҡаһы, иҡтисад үҫешһен өсөн стимул кәрәк, шәхси ҡыҙыҡһыныу булмаһа, бер ниндәй иҡтисад та үҫешмәйәсәк, минеңсә.

**И. ҒӘБИТОВ:** Хәҙер, үкенескә ҡаршы, намыҫлылыҡ архаизм һанала. Әгәр ҙә һин үҙеңде намыҫлы, ғәҙел тотһаң, күптәр һиңә көлөп ҡарай. Ришүәтселек хәҙер норма һанала башланы. Әйтәйек, һин краныңды төҙәткән өсөн сантехникҡа, ул йорт идаралығында штатта тороуына ҡарамаҫтан, күпмелер аҡса бирҙең, ти. Сантехник ул аҡсаны ниндәйҙер проблемаһын хәл

булмаһа, шараптары имен ҡалыр ине.

**▸ Совет осоронда төрлө милләт кешеләрен коммунизм төҙөү идеологияһы берләштерһә, хәҙер уларҙы иҡтисад, дөрөҫөрәге, көн итергә ынтылыш берләштерә һәм, теләйбеҙме-юҡмы, милләттәр араһында интеграция, бер ниндәй ҙә идеологияға ҡоролмаған тәбиғи аралашыу бара. Бындай аралашыуҙың ниндәй ыңғай яҡтарын күрәһегеҙ?**

**Х. МӨХӘММӘТЙӘРОВ:** Минең бер танышымдың улы атаһынан өлкән бабайына Петка тип өндәшә. Шул уҡ ваҡытта бер чечен егете үҙенән ике йәшкә өлкән ағаһына "һеҙ" тип өндәшә. Милләттәр араһындағы тәбиғи аралашыуҙың ыңғай яҡтарын мин ошо ике миҫал айырымлығында күрәм. Беҙгә илебеҙҙә иң тәүҙә тәртип урынлаштырыу фарыз, ә тәртипте милли йолаларһыҙ, милли үҙенсәлектәрһеҙ урынлаштырыу мөмкин түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Итәк ҡырҡып, ең ямап көн итәбеҙ. Ә бит итәкте тунай-тунай, бер көн килеп бестәтәү хәлендә ҡалыуыбыҙ ҙа бар. Еңле булыу менәнме ни. Дәүләттә, илдә ниндәй генә ижтимағи ҡоролош үҫеше йүнәлеш алмаһын, ул капитализм йә социализм булһынмы, әгәр ҙә ул ҡоролош күпселек халыҡты хәйерсе хәленә төшөрөүгә, һанаулы ғына кешеләрҙе самаһыҙ байығыуға килтерә икән, ул "изм"дарҙың береһе лә дөрөҫ түгел. Әңгәмәлә ҡатнашыусылар ошо хәҡиҡәтте раҫланы, буғай.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## МОСТАЙ НӘСИХӘТТӘРЕ



# ИҢ ҘУР БАЙЛЫҒЫМ - ҺҮҘ, унынһы ла халыҡтыҡы...

**Уның һәр һүҙе, әҫәре халҡыбыҙ тәжрибәһенә, аҡылына, дөйөм кешелектең меңәр йылдар буйына һыналған рухи-әхлаҡи ҡиммәттәренә нигеҙләнгән. Ул үҙе был турала бына нимә ти: "Һүҙҙән башҡа байлығым юҡ минең. Унынһы ла үҙемдеке түгел. Халыҡтың һүҙ ҡаҙнаһынан алып һаҡлыҡ менән самалап ҡына тотонам..." Сит мөхит аҡыл эйәләренең генә түгел, ә үҙебеҙҙең Мостай Кәрим кеүек әҙиптәрҙең фәлсәфәүи фекерҙәренә лә ҡолаҡ һалһаҡ, беҙҙән дә аҡыллыраҡ, көслөрәк, бәхетлерәк халыҡ булмаҫ. Кемгә нисектер, ә мине уның һәр һүҙе, фекере уйландыра, илһамландыра. Уның тапҡыр һүҙҙәрен һәм фекер гәүһәрҙәрен яйлап ҡына, сүпләп кенә, рәхәтләнеп бер урынға йыйҙым бына. Мостай ағай әйтмешләй: "Күпме әҙәмдең йылыһын, яҡтыһын, кәрен йөрөтәм икән мин үҙемдә?" Өҫтәп шуны әйткем килә: был фекерҙәр уйлана белгән кешеләр өсөн генә түгел, ә тормош тураһында уйланырға теләмәгәндәр, теге йәки был сәбәп менән уйланырға форсаты булмағандарға ла тәғәйенләнә.**

● "Бөйөктәрҙең күңеле тыныс булыу мөмкин түгел..."

● "Һорамай биргән кәңәште күп әҙәм ҡабул итмәй".

● "Әҙәмдәр тараҡан яуызлыҡ, зар, көнсөллөк, хәсрәт, ялғанлыҡ донъяны завод торбаларынан сыҡҡан һарғылт-йәшел төтөндән ныҕыраҡ ағыулай."

● "Хәҙерге йырҙарҙың күпселеген тыңлау - төбө тишек бокалдан шарап эсеү шикелле".

● "Ғашиҡтар тауға менә, аҙғындар соҡорға төшә..."

● "Ерҙән таш атып, һауалағы бөркөттө кем үлтергән!"

● "Ифрат йәмһеҙ кешеләр була, әммә уларҙың һәр нәмәһе үҙенеке: кәкре танауы ла, ҡылый күҙе лә, ҡыйыш ауыҙы ла, һалбыр ҡолағы ла..."

● "Ҡарағай ниндәй һылыу ҙа бит, унда емеш үҫмәй. Емеш ул кәкре-бөкрө ағаста үҫә".

● "Көн яҡтыһын, ер йылыһын беҙ, ғәриптәр, һеҙгә ҡарағанда күберәк тоябыҙ, шунлыҡтан тормошҡа сытырлап йәбешеп ятабыҙ. Беҙ үҙ-үҙебеҙгә ҡул һалмайбыҙ, сөнки беҙ йәшәүҙән майымлап, туйып һикермәйбеҙ".

● "Һин дә алтын булһаң, мин дә алтын булһам, ул алтындың ни ҡәҙере ҡалыр ине?.."

● "Ғишыҡ тотоп йәшәр өсөн бихисап түҙемлек, сабырлыҡ кәрәк".

● "Яҡшылар ямандарҙан былай ҡатыраҡ хөкөм ителергә тейеш, сөнки улар йәмғиәттең өмөтө һәм таянысы..."

● "Ғазапты ла тәҡдир теләһә кемгә ебәрмәй, күтәрерҙәй әҙәмгә генә ебәрә..."

● "Ҡатын кеше шулай гел ҡунаҡ көткән шикелле йәшәргә тейеш".

● "Төрлөһө бар, туған, әжәлдең ап-ағы, нур сәсеп торғаны була".

● "Кешенең үҙ теләге менән эш башҡарып, үҙ иркендә йәшәп уҙғарған көндәре - иң бөйөк, иң ҡәҙерле миҙгелдәр. Ошо миҙгелдәрҙән яҙмыштың үҙәге барлыҡҡа килә".

● "Йыназа - ул йәмғиәттең кешегә һуңғы баһаһы".

● "Бик күптәр, ғүмер баҡый әллә ҡайҙа ситтә елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөйҙәр ҙә йән бирер алдынан васыят әйтеп ҡалдыралар..."

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

Көтмәгәндә-уйламағанда Нур Сәлимович Мәхмүтов сағыу, ялтыр хәрефтәр менән яҙылған күркәм саҡырыу открыткаһы алды. Ул башта аптыраулы ҡарашын ҡаршыһына баҫҡан йәш ҡыҙға һирпте, шунан әлеге открытканы ҡайҙа итергә белмәгәндәй, ҡулында әйләндергеләне.

Был ташҡа баҫылған сәләм хатын яр аҫтынан яу сыҡҡандай сәйерһенеп, ыуаланып ҡабул итеүе шунан ғибәрәт: хаҡлы ялға сыҡҡандан бирле әүәлге эш урынында уны тәүге тапҡыр хәтерҙәренә төшөрөүҙәре һәм ошо хәбәрҙе ебәреүҙәре. Ҡала хакимиәте йылдың йылы ҡарт-ҡороно ололар көнө айҡанлы сәй табынына йыя йыйыуын, өҫтәүенә, ойоштороусылар мәжлес һуңында яһалма ихласлыҡ күрһәтеп, битараф йөҙҙәрен көсләп йылмайтып, һәр килеүсегә сығыр ерҙәге мөйөшкә өйөлгән пакеттарға һалынған ҡуш йоҙроҡтай күстәнәсте тотторол оҙатҡан була, һый-хөрмәт күрһәтеүҙәре инде үҙҙәренсә. Һәр предприятие етәксеһе аҡса бүлеп ойошторған ҡарттар йыйынына  китер сығымдарға ул пенсияға сыҡҡан төҙөлөш тресы ла тейеш өлөшөн индерәлер, күрәһең. Нур буштан килгән һыйланыуҙарҙы өнәп бөтөрмәгәнлектән, бер нисә тапҡыр барып, эсе бошоп ҡайтты ла, һуңғы йылдарҙа ундай урындарға йөрөүҙән ҡырҡа баш тарта килә, ҡатынының өгөтләүҙәренә лә маҙаһыҙлаған күгәүендәрҙән ҡотолорға теләп сәбәләнгән алашалай ҡулдарын һелтәп лауылдай: "Тамаҡ өңдөп, бүләк там итеп һәмтәңләргә ҡушаһыңмы ҡартайған көнөмдә, ана, нәфсеһен тыя белмәгән ҡарун Ғәфүр барһын!"

Нур ғүмере буйы төҙөлөштә бригадир вазифаһында эшләне. Һөнәрен яратып, күңелен һалып ихлас башҡарҙы. Ҡурсаҡтай йәмле, уның ауылы янындағы Аҡҡаялай мөһабәт итеп төҙөгән йорттарын шутлай китһәң, ике ҡул бармаҡтары етмәҫ. Ауылында урта мәктәпте тамамланы ла, юныу-йышыу һөнәре, оҫталыҡ шөғөлө йәненә яҡын булғанлыҡтан, һабаҡташ дуҫына эйәреп, ҡала профтехучилищеһына юлланды. Белем алғас, ошонда уҡ төҙөлөштә ҡалды. Ул арала булмай хәрби хеҙмәткә саҡырҙылар. Ил алдындағы изге бурысын үтәне, ауылға ҡайтып, ҡаҡшаған йорт-ҡураны һипләне һәм гимнастеркаһын да һалып тормай, кире ҡалаға юлланды. Әле яңғыҙым көн итерлекмен, бирешмәм, һайлаған һөнәрең буйынса әҙерәк эшләп ал, аҙаҡ күҙ күрер, тип әсәһе лә улының теләгенә ҡаршы килмәне. Тәүге йылдарҙа үҙе ише тиҫтерҙәре менән дөйөм ятаҡта йәшәне, ике йылдан тырыш, егәрле егеткә яңы төҙөп тапшырылған йорттан ике бүлмәле фатир бирҙеләр. Әле лә шунда йәшәп ятҡан көнө, торлағын иркенәйтеү йәһәтенән һоранманы, теләнселәмәне, маҙаһыҙламағас, хужалары ла тәғәйен иғтибарҙы күрһәтергә ашығып барманы.

Медицина училищеһында уҡып йөрөгән ауыл ҡыҙы Разия менән йәштәр кисәһендә танышҡайнылар, оҙаҡҡа һуҙмай өйләнеп тә ҡуйҙы. Бер йылдан игеҙәк улдары Камил менән Данил, ары төпсөктәре Раушания тыуҙы. Тормошо яйға һалынғас, ауылда ҡалған яңғыҙ әсәһен янына күсереп алды. Ҙур ғаиләлә ҡыҫынҡылыҡ тойолманы, берберенһен аңлап, күтәрмәләп, хәстәрләп, татыу йәшәнеләр. Буй еткереп, үҙаллы тормош юлына аяҡ баҫты инде балалары: игеҙәктәр нефть институтын тамамлап, Себер яҡтарында төпләнеп, газ-нефть ятҡылыҡтарын эҙләү-табыу эштәре менән булаша, Раушания әсәһенең һөнәрен үҙ итеп, медицина юлынан киткәйне. Башта урындағы училищела, ары баш ҡалалағы институтта белем алып, әле Өфөләге бер дауаханала бүлек мөдире йөгөн тарта, күптән түгел медицина фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация ла яҡланы.

Һиҙелмәһә лә, шулайтып йылдар артынан йылдар үтә торҙо, хәҙер инде улар икеһе лә хаҡлы ялда. Әсәһе ҡартайған көнөндә  улы һәм килененән ҡәҙер-хөрмәт күреп, көнитмешенә шөкөрәна ҡылып йәшәне лә, һикһәнен тултырып үлеп китте. Васыятын үтәп, ауылға алып ҡайтып ерләнеләр. Ә балалары, эш кешеләре, ҡайтып күренеп, ата-әсәләренең хәлен белергә лә форсат тапмайҙар һуңғы йылдарҙа. Икәүҙән-икәү генә ҡалғас, фатирҙары бушап, етемһерәп ҡалғандай итте. Шуға берберенһен юғалтып ҡуйыуҙан ҡурҡҡандай, эйәртенешеп йөрөп хәбәр һөйләшәләр хәҙер. Нур үҙе хаҡлы ялға сыҡҡандың икенсе көнөндә үк эшен урынына әҙерләп йөрөгән ярҙамсыһына тапшырҙы.

Разияһы һаман да эшен ташламаған, терапия бүлегендә дежур шәфҡәт туташы булып эшләй. Һиҙемләүенсә, әлегә өйҙә ултырырға йыйынмай ҙа шикелле. "Әрһеҙләшмә ҡәҙереңде ебәреп, мәлендә әҙәмсә китә лә бел, һөймәгәнгә һөйкәлмәйҙәр!" "Нишләп әрһеҙләшәйем, ти, йәнем тартҡан шөғөлөм, минең һымаҡ һаулыҡ һаҡлау




алдынғыһы аҙым һайын осрап бармай, - тип яуаплай бисәһе, - коллегаларым алдында абруйым бар, ауырыуҙар яратып, ихтирам итеп торалар, дежурға килеүемде көтөп ала алмайҙар, укол ҡаҙағанынды ла тоймайбыҙ, ҡулың бигерәк йомшаҡ, тиҙәр". "Бер ҡатлы икәнлегеңде һиҙгәнгә һалпы яғыңа һалам ҡыҫтыралар, ә һин, бер ҡатлыланып, шуға ышанаһың. Ауырыуҙарҙың көнө балнисҡа ҡалғас, ни хәл итһендәр инде?!" Зитына тейеүгә сыҙамаған ҡатыны ла уҫал ҡаҙала: "Ҡабатлап әйтәм, мына мин - отличник, ә һин ғүмерең буйы тир түгеп тә ғәмәлгә яраҡһыҙ маҡтау ҡағыҙҙарынан башҡа, исмаһам, мир алдында бәҫеңде күтәрерҙәй берәй исемең дә юҡ", - тип йәнен үртәй иренең. "Уның ҡарауы, егеттәр һаман да һағынып иҫкә алалар икән, сөнки оҫталыҡ, нескәлек талап иткән бар эштәр минең өҫтә ине. Әлегә тиклем дәдәңдең ысулы менән мөйөштәрҙе тоташтыра белмәйҙәр икән, күпме өйрәттем, тәки сөрәкә баштарына һеңмәгән!" -тип бирешергә теләмәй телләшә Нур Сәлимович.

Ҡатыны менән шулай сәкәләшеп алалар ҙа, икеһе ике бүлмәгә инеп бикләнәләр. Тик оҙаҡҡа түгел, ҡайтымһаҡ, ҡайһы саҡ оторо ҡупһа ла ыңғайға һыпырып төҙәтеп ҡуйыуға маһир Разияһы үпкәһен тиҙ үк онота ла, аш бүлмәһенә үтеп, йүгермәләп йөрөп сәй табыны әҙерләй, шунан ипле генә итеп өндәшә: "Ҡуй, сүптән сүмәлә өйөп, тәмһеҙләшмәйек, әйҙә, сәй һөрпөлдәтеп алайыҡ, үҙең беләһең, һиңә әҙләп-әҙләп кенә йыш ашау кәрәк. - Һөйләшеүҙе лә ыңғай яҡҡа көйләй. - Кисә, һин өйҙә юҡ саҡта, Раушанияның улы Рәмил шылтыратты, ҡартатай нисек йөрөй әле, ти". Ейәне тураһында ишетеү Нурҙы шунда уҡ үҙгәртеп ебәрә, йөҙө асылып, маңлай һырҙары яҙылып китә. Былай ҙа, яйы сыҡҡан һайын ейәнемдең  төҫ-башы ла, ҡылығы ла үҙемә оҡшаған, тип ҡабатларға ярата, һәр хәлдә, Ғәфүрҙең боламыҡ ейәндәре түгел инде, тип тә өҫтәй.

Өнәп еткермәй шул Ғәфүрҙе; һөйләшеүен, атлап йөрөүен, килешһеҙ, әрпеш итеп кейенеүен, хатта ҡорһағын тыш яҡҡа бүлтәйтә биреп тарбайып баҫып тороуын да ене һөймәй. Уны мөрхәтһенмәүен, ятһыныуын үҙе лә аҙағынаса төшөнөп етмәй, әллә йәш саҡта ҡатынының артынан һөйрәлеүен онота алмаймы,  әллә ғүмере буйы төҙөлөш бухгалтерияһында ыштан туҙҙырыуын оҡшатмаймы, әллә ир-атҡа килешмәгән ваҡсыллығын ҡабул итмәйме, бер Хоҙай белә. Һуңғы сиктә, теләйме ул, юҡмы, аралашалар барыбер, ни тиһәң дә, тиңдәштәр, замандаштар, һөнәрҙәре тап килмәһә лә бер треста эшләнеләр.

Йәш саҡта Ғәфүрҙең уның Разияһын яратыуын белеп-һиҙһә лә, уға артыҡлап иҫе лә китмәне, сөнки һөйгәненең уға күҙ һалыу ғына түгел, боролоп та ҡарамаҫын белә ине. Урта буйлы, бөрсәләй хәрәкәтсән, үткер, тура һүҙле, һөйкөмлө, сибәр ҡыҙ нишләп кенә тишек арбанан төшөп ҡалған бер йүнһеҙҙе һайлаһын? Хатта Разияның уны үҙ итеп һайлап кейәүгә сығыуын әле лә төшөнөп етмәй. Ошонан аҙаҡ ҡатын-ҡыҙ ҡарап-күреп түгел, ишетеп ярата, тигән ырымға ышанма инде. Йоҡа, һонтор кәүҙәле, ыҙмалалай ҡара бөҙрә сәсле, етдилеген белгертеп сирылып тоташҡан ҡалын ҡаштары ас яңаҡлы йөҙгә уҫаллыҡ һыҙаттары өҫтәһә лә, Нур, асылда, ипле һүҙле, тыйнаҡ мөнәсәбәтле егет ине, ә ҡыҙҙар, ғәҙәттә, ундайҙарға һылашып барыусан. Йылдар үтеү менән һүҙсән ҡатынына эйәреп, әйтерен тоҙлап-борослап ысҡындыра ысҡындырыуын, мәгәр эскерлектән түгел, ҡапыл тоҡанып китеүсән яндырайлыҡтан...

* * *

Саҡырыуҙы килтергәндәрендә фатирҙа ул яңғыҙы ине. Йәш ҡыҙ ҡағыҙ битендәге исемлеккә ҡултамғаһын ҡуйҙырҙы ла, мөләйем йылмайып өҫтәне: "Һеҙгә барыу мотлаҡ, шуға ҡултамғағыҙҙы алырға ҡуштылар. Көтәбеҙ". Саҡырыусыны оҙатты ла, залға үтте Нур, ҡәнәфигә ҡулайлап урынлашҡас, күҙлеген кейеп, открытканы ҡәҙерләп ҡулына алды, асты, унда яҙылған һүҙҙәрҙе шыбырҙап уҡыны: "Төҙөлөш тресының 80 йыллыҡ юбилейына арналған кисәгә саҡырабыҙ. Һеҙҙең урын..."

Башын артҡа ташлап бераууыҡ онотолдо, эшләгән йылдары бер-бер артлы күҙ алдынан йүгереп үтте. Был һикһәндең ҡап яртыһы уның хеҙмәт өлөшөнә төшкән. Ҡайһылай ауыр шарттарҙа башлағандар ине бит әле ҡалалағы төҙөлөштә: техника етешмәй,

кирбес-цементын килтереп өлгөртә алмайҙар, сөнки тимер юл яңы һалына башлаған осор ине бит. Кирбестәрҙе өçкә мендереү өсөн краны ла юҡ, носилкаға көн ҡала. Ҡышҡы селләләрҙә йылынып сығыр урын тапмаçһың. Ә шулай ҙа йәмле заманда эшләгәндәр барыбер, ул саҡта әҙәм балаһының күңелендә киләсәккә яҡты ышаныс бар ине. Бөгөн шул трест теге саҡтағынан да ауырыраҡ көрсөккә килеп терәлгән, тиҙәр, төҙөлөш тә бармай икән, йылына бер-ике йорт тапшыралар ҙа - вәссәләм, шунан юғарынан килгән түрәләргә төҙөгәндәрен әллә нисә ҡат күрһәтеп маҡтаналар, йоморҭҡа һалған һайын шашынып ҡыҭҡылдаған тауыҡ ише ҡыланалар. Анау ҡала дауаханаһын ыҙалай-йонсой саҡ ослағайнылар, хәҙер шуны рәсми рәүештә асып, өс тапҡыр ал таçманы киçтеләр. Һуңғыһы үтә лә күтәренкелек шарттарында үтте: көн һалҡын уҡ булһа ла, медперсоналды аҡ халаттарын кейҙереп теҙеп баçтырып ҡуйҙылар. Абруйлы ҡунаҡ көттөрөп-ялындырып килде, ул күренеү менән йыйылыусылар һалҡындан тумбыҡҡан быуындарын көскә яҙып, ҡул сабып маташтылар, күккә аллы-гөллө шарҙар осорҙолар. Күҙ буяу был, ысын мәғәнәһендә үҙеңде лә, башҡаларҙы ла алдау. Ә бит ҡаланың ҡап яртыһын улар ҡалҡытты, улар төҙөнө, бер йылы тиçтәнән ашыу йортто ҡулланыуға тапшырыуҙары хәтерендә. Етештереү объекттары, мәктәптәр, балалар баҡсалары, мәҙәниәт йорттары төҙөлгәс, халыҡ та дәррәү күсеп килә башланы. Кәрәкле белгестәргә шунда уҡ, ҡалғандарға ике-өс йыл арауығында фатирҙар бушлай бүленде. Матур, күңелле йәшәгәндәр, тырышып эшләгәндәр ни тиһәң дә...

Разияһы эштән ҡайтып инде лә, өçтөн алыштырып, йорт мәшәҡәттәре менән булашып алып китте. Таҙалыҡ, бөхтәлекте ярата шул, ҡайтып инһә, ҡулынан еүеш сепрәк төшмәй, унан ҡалһа, геүелдәтеп саң һурҙырғысты тоҡандырып ебәрә, һауыт-һабаны йыуырға-йышырға тотона. Уңды ҡатынынан, һүҙ ҙә юҡ, уңды. Ата-әсәһенән иртә ҡалып, олатаһы-өләсәһе ҡулында тәрбиәләнгәнлектән, терпеләй энәләрен ҡабартып һаҡланырға әҙер, мәгәр күңеле йомшаҡ, йәне миһырбанлы, ире, балаларын ҡайғыртып, хәстәрләп йәшәй.

Нур ҡылъяймаған ҡиәфәттә улай-былай үткеләгән булып, бүлмәләр араһын кәлепләне лә:

- Ҡарсыҡ, мине бит төҙөлөш тресының юбилейына саҡырҙылар, - тине һәм открытканы алып, ҡатынына һондо. Тегеһе нуры ҡайта башлаған күҙҙәрен ҡыçа төшөп, яҙылғандарҙы уҡырға маташты ла, килеп сыҡмағас, ҡулындағын өçтәлгә ырғытып, ғәжәпләнеп һуҙҙы:

- Бына һиңә иçке ауыҙҙан яңы хәбәр, ошоғаса мәжлестәргә барыуҙан ҡырҡ һылтау табып ҡаса инең, әле шуға ҡыуанаһыңмы?

- Был инде икенсерәк ойошторолған сара, беҙ нигеҙ һалған төҙөлөшкә 80 йәш тә тулып киткән.

- Бөгөн ни, әҙәм рәтле эшләргә белмәһәләр ҙә, байрам итергә хиреçләнеп алдылар, тормош ҡиәмәт көнөндәге шайтан туйына оҡшап бара, билләһи. Әйткән нимәң дә сираттағы шау-шыу ғыналыр.

- Улай тимә әле, трест йәнемә яҡын һәм ҡәҙерле, ни тиһәң дә, унда ярты ғүмерем үтте, хеҙмәт кенәгәмдә лә бер генә яҙыу, тимәк, ҡала төҙөлөшөнөң айырылғыһыҙ өлөшөмөн.

- Өлөшө, тимә инде, бәләкәй генә шөрөбө.

- Бер шөрөп етмәһә, тотош механизмың туҡтап ҡала, шуны онотма.

- Шөрөптөң дә төрлөһө була, пенсияға сыҡҡас, шул механизмдан төшөп ҡалдың, ә ул туҡтанымы? Юҡ! Әлеге мәлдә Нур ғына түгелһең, пенсионурһың, шуны маңлайыңа киртеп ҡуй!

**(Дауамы бар).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# УРМАНДАР ЯНҒЫНДАРҘАН ТҮГЕЛ,

## кеше ҡулынан юҡҡа сыға

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баçҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Юлай ЯНБАЕВ, биология фәндәре докторы, профессор, Башҡорт дәүләт аграр университетының ғилми-белем биреү үҙәге мөдире:** Мин был майҙанға урмандарыбыҙ тураһындағы һөйләшеүҙе алып сығып, ошо мәсьәләгә халыҡтың иғтибарын йәлеп итергә теләйем. Экология мәсьәләһе - ул кисекмәçтән көйләүҙе талап иткән иң ҙур проблемаларҙың береһе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн йәмәғәтселек быны аңлап етмәй. Фәнни йүнәлешем буйынса ағас үçемлектәрен өйрәнәм, шуға күрә урмандарыбыҙҙың күпләп ҡырылыуы фактына аҙым һайын юлығырға тура килә. Башҡортостаныбыҙҙа законһыҙ ағас киçеү ике юл менән алып барыла. Беренсенән, урындағы халыҡ үҙ хужалығы өсөн ағас ҡырҡа. Икенсенән, браконьерҙар урманды талай. Һуңғыларынан зыян үтә ҙур, сөнки урман сәнәғәт масштабтарында ҡырыла. Ҡыҙғанысҡа күрә, урман хужалығын реформалағандан һуң, һаҡсыларҙың һанын кәметкәс, ҡуртымға алыу мөмкинлеге бирелгәс, урманды күҙәтеү аçтында тотоуы ауырлашты. Һөҙөмтәлә, иң яҡшы урмандар, ағастарыбыҙ киçелә. Аҡса артынан ҡыуыусылар арҡаһында урман генофонды юҡҡа сыға. Ҡырылған урман урынында башҡаса ағастар үçмәй. Ҡуртымға алыусылар иһә үҙҙәрен бында хужа итеп тоя һәм киләсәкте уйламайынса, тәбиғәткә зыян килтереп эш итә. Шуға ла янғындарға ҡарағанда, кеше ҡулынан күрелгән зыян күпкә ҙурыраҡ.

Урман менән законһыҙ сауҙа итеү донъя масштабында бара. Себер, Алыç Көнсығыш урмандары Ҡытайға китә. Ҡытай иһә беҙҙең ағасты башҡа илдәргә ҡиммәтле хаҡҡа һата. Бигерәк тә эрбет, ҡарағас кеүек ағас төрҙәре юҡ ителә.

Был кире күренештәргә ҡаршы тороу юлдарының береһен фәнни эҙләнеүҙәрҙә күрәм. Хәҙер фәндә ағастарҙың ДНК-һын өйрәнеү, уларға штрих-код яһау йүнәлеше киң үçешә башланы. Уның ғәмәлдә ҡулланылышы законһыҙ ағас киçеү менән көрәшергә булышлыҡ итәсәк. Быға тиклем ағас легаль ҡырҡылғанмы, юҡмы икәнен теүәл билдәләгән алым юҡ ине. Ҡағыҙҙар буйынса ғына ағастың үçкән урынын асыҡлау мөмкин түгел. Беҙҙең университет ағас үçемлектәренең ДНК-һын өйрәнеү буйынса эшләп, урмандарыбыҙҙың юҡҡа сығыуына ҡаршы бер аҙым яһай, тип уйлайым. Әммә бөтә урмандарҙың ДНК-һын асыҡлап сығыу өсөн бик ҙур көс һәм аҡса кәрәк. Шуға күрә беҙ Германия, АҠШ ғалимдары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Уларҙа был хеҙмәттәшлек ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, сөнки уларҙың үҙҙәрендә яһалма урмандар ғына үçә, ә тәбиғи урман Рәсәйҙә һәм тағы бер нисә илдә генә һаҡланып ҡалған.

Балыҡсылыҡ тармағында генетик тест ҡулланыу - күптәнге тәжрибә. Шул рәүешле зконһыҙ сауҙа итеүсене тотоп, браконьерҙарға ла сығалар. Урмансылыҡ тармағында ла шулай булыр тип өмөтләнәм. Ғәмәли ҡулланылыш үҙен оҙаҡ көттөрмәç. Әммә бер шик бар. Рәсәйҙә бит тәбиғи байлыҡты ҡәҙерләй белмәйҙәр. Беҙҙә кемдеңдер кеçәһен ҡалынайтыу маҡсатында хатта фәнни ҡаҙаныштарҙың ғәмәлгә ашырылыуына көртә ҡуйылыу хәүефе бар.

**Рубриканы Мөнир ИҠСАНОВ алып бара.**

*ЙӘШ ШАҒИР АУАЗЫ*

# ХӘҘЕР ТАНК КЕҮЕК ҠАТЫНДАР

## Этәрә алға илде

**Шиғриәт - күңелем асылы. Ул минең булмышымда. Кемдер яҙғандарым хаҡында, бер ҡатлыраҡ, тип көлөмһөрәр, кемдер уларҙа йәшлек максимализмы күрер... Эйе, тормоштоң күп яғын аңлап та бөтмәйемдер әлегә. Әммә шиғырҙарымда - күргән-кисергәндәрем, тормошто үҙ күҙлегемдән баһалауым.**

### Ҙур ҡала

Ныҡлы иттең. Ышанысты
Арттырҙың үҙ-үҙемә.
Һөйләшәм әңгәмәсенең
Тура ҡарап күҙенә.

Оялсанлыҡ юҡҡа сыҡты.
(Әллә бары ойоно?)
Асҡыстар бирҙең бикләргә
Барлыҡ хисте-тойғоно.

Ҙур ҡала, үтте шул һиңә
Аптырап баҡҡан ваҡыт.
Робот-карьерист яһайһың
Һин кеше рухын ватып.

### Һынау

Исемең шикле, тинең дә
Ҡараның үтә һынап.
"Милләтең ниндәй?.. Украин?.."
Мин дә бағам аптырап.

Ҡурайҙа уйнап күрһәттең -
Башҡорттар моңло була.
"Ҡумыҙҙа сиртәһеңме һуң?"-
Хәйлә-һорау тағы ла.

"Нишләп көлөшөп тораһың,
Имеш, бынау рус менән?"
Был һорауға иларғамы?
Юҡ. Иламайым - көләм.
Үәт һынау башҡорттоң
Ысын ҡыҙы тигән сифатҡа.
Мәргәнлек тә тикшерелде,
Менеп күрһәттем атҡа.

"Сәйҙе үҙебеҙсә һемер!
Беҙ эсәбеҙ йотлоғоп".
...Күптән сығып китер инем,
Әҙәп һаҡлап ебәрмәй шул
Һин һынаған башҡортлоҡ.

### Йоҡо

"Үҙ тупрағымда йәшәйем.
Мин - Уралтау балаһы!"
Күкрәк һуғырға әүәçбеҙ,
Һүҙ һөйләйбеҙ самаһыҙ.

Төп хужа булғас, эленгән
Иң түргә сабатабыҙ.
Башҡалар эшен һағалап,
Ҡурай тартып ятабыҙ.

Йылғыр, етеҙҙәр беҙ түгел.
Уйлайбыҙ етмеш ҡабат.
Сафсата һатабыҙ әле:
"Бөттөләр, - имеш, - талап!"

Йоҡла, халҡым, тәмле төштәр
Күреп, иҙерәп кенә.
Заман толпарын йүгәнләп
Беҙҙә башҡалар елә...

### Заман ҡатын-ҡыҙҙары

Нәзәкәтлек! Ошо сифат
Байрағы ҡатын-ҡыҙҙың.
Заман ғына - бирән ҡунаҡ,
Ауыҙын шуға һуҙҙы.
Йәм өрөп ултырған
Апайҙар һирәк инде.
Хәҙер танк кеүек ҡатындар
Этәрә алға илде.

Ҡайҙа инде биҙәнгестәр,
Театрҙар, кисәләр?
Тормош дилбегәһен тарта
Ир сифатлы бисәләр.

### Беҙ

"Сезнең халыҡ тамам шашкан,
Сез усал һәм тәкәббер!"-
Ниңә шулай асыуланып,
Татар күршем әрләйҙер.

"Самозванцы! Бунтари!" - тип
Дыу килтерә урыçтар.
Ысынлап та, беҙҙекеләр
Бер аҙ ҡоро, ҡырыçтар.

Инде ҡараға батыра
Башҡорт үҙ милләттәшен.
Татыулыҡҡа саҡыра бит
Ата-баба кәңәше.

Һәр кемебеҙ айырым-айырым
Аҡыллы, рухлы, имеш.
"Сафлыҡ!" тип күкрәк һуғабыҙ
Батҡаҡта ятҡан килеш.

### Нәфрәт

Ҡулдан килһә, һине ерҙән
Юҡ итер инем.
Ағыу түлле, йылан заты -
Шашынған килен.

Буш ҡул төшмәгән
Бирнәгә
Меçкенлек тотҡан.
Аçыл заттарҙы ҡапҡанға
Ашығып йотҡан.

Нәфрәтләнеп тоçҡап торам
Һиңә мылтыҡты,
Илемде бисара иткән
Килен - араҡы.

**Олеся ӘХМӘТРӘХИМОВА.**
**Дәүләкән районы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТТӘ ГЕНӘ...

## бәрәкәт бар

■ Медицина хеҙмәткәрҙәре йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы өсөн файҙалы булған аҙыҡ-түлек исемлеген төҙөгән. Исемлектең башында һоло буҡтаһы тора. Был буҡтала фолий кислотаһы, калий күп. Исемлекте артабан ҡан баҫымын төшөрөүсе, ҡан ойошоуға тәьҫир итеүсе һөмбаш балыҡ (лосось) дауам итә. Артабан - авокадо һәм зәйтүн майы: улар холестерин кимәлен түбәнәйтә. Бишенсе урында - сәтләүектәр: уларҙа омега-3 майлы кислоталар күп. Артабан - көртмәле, ҡурай еләге һәм ер еләге: улар организмдағы шешеү процестарын туҡтата. Етенсе урынды омега-3 майлы кислоталарға һәм калийға бай ҡуҙаҡлылар алып тора. Һигеҙенсе урында шпинат, унда лютеин, калий, фолий кислотаһы бар. Етен майы туғыҙынсы урында. Исемлекте холестерин кимәлен түбәнәйтергә ярҙам итеүсе соя продукттары тамамлай.

■ Ғалимдар раҫлауынса, һәр кем 100 йәшкә тиклем йәшәй ала. Американың Джорджия штаты университетында ғүмерҙе оҙайтыу ысулдарын өйрәнеү буйынса ғилми эш алып барыла. Ғалимдар 2001-2009 йылдар арауығында 100 йәш һәм унан да олораҡ 240 кешене тикшереп, ғүмер оҙайлығына тәьҫир итеүсе психологик һәм социаль факторҙарҙы асыҡлаған. Геронтология институты директоры һәм тикшеренеүҙәр авторы Леонард Пун белдереүенсә, оҙаҡ йәшәргә теләүселәргә тормошто тиң ыңғай яҡтан ҡабул итергә кәңәш бирә. Был оҙағыраҡ йәшәүҙең иң мөһим факторы.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Былдай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә.

■ Йола буйынса ир-аттарҙың дәрәжәһе ҡатын-ҡыҙҙарҙың дәрәжәһенән юғарыраҡ булған илдәрҙә (Индонезия, Пакистан, Ҡытай, Сәғүд Ғәрәбстаны, Уганда) тәмәкене башлыса ир-ат тарта. Австралия, АҠШ, Канада, Швеция, Норвегия кеүек үҫешкән илдәрҙә ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыусылар тәмәкесе ирҙәр менән бер тигеҙ тиерлек. Белгестәр әйтеүенсә, әгәр ҙә был илдәрҙең иктисадисәйәси сценарийы ошо уҡ йүнәлештә барһа, ун-егерме йылдан миллионлаған ҡатын-ҡыҙ төрлө сирҙәргә һәм иртә үлем хәүефенә дусар буласаҡ. Әгәр ҙә бөгөн тәмәке тартыу һөҙөмтәһендә йылына 5 миллион кеше үлһә, 2030 йылға был һан 8 миллионға тиклем етеүе ихтимал, ти аналитиктар.

■ Офис хеҙмәткәре көнөнә уртаса ете сәғәт йоҡлай, ә эш өҫтәле артында 5 сәғәт 41 минут буйына ултыра. Ғалимдар иҫәпләүенсә, былдай дөрөҫ булмаған нисбәт уның физик ҡына түгел, ә психик сәләмәтлегендә лә сағылыш таба. Инглиз ғалимдары әйтеүенсә, күберәк хәрәкәт итеү физик торошто яҡшырта, ә ул үҙ сиратында күңел тыныслығына килтерәсәк.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# БӘЙҒӘМБӘРҘЕҢ ЙОРТО



**Ул Абдулла менән Әминәнең тормош рәүеше тәҡүәлелек менән айырылып торған изгелекле ғаиләһендә донъяға килгән. Бик иртә етем тороп ҡала ул. Бәйғәмбәр булғас, Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Мине Аллам ҡарап үҫтерҙе, шундай матур тәрбиә бирҙе", - тип әйткән.**

Ярым ҡырағай, наҙан, бәғерһеҙ һәм боҙоҡ кешеләр араһында ул ҡырҡ йыл саф тормош менән йәшәй. Аллаһы Тәғәлә уға уның миссияһын әйтеп биргәс, ул быны ҡабул ҡыла һәм әлеге кешеләр янына килә. Ул улар араһында намыҫлылығы һәм ышанысылығы менән билдәле була. Күптәр Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тураһында, ул алдай, тип әйтә алмаған, сөнки уның үҙ һүҙенә тоғро булыуын белгәндәр, гәрсә ул һөйләгән һүҙҙәрҙең асылын инҡар итһәләр ҙә. Уның йөҙө шундайын да гүзәл була, кешеләр уны күреү менән шундуҡ уның саҡырыуҙарын ҡабул итә. Уның атлап килеүҙәре тауышһыҙ була һәм тынысландырғыс тәьҫир итә. Уның шәхесе мөһәбәтлелегенән кешеләрҙә ҡурҡыу ҡатыш ихтирам тыуған, шуға күрә ул һәр ваҡыт: "Мин дә һеҙҙең кеүек үк кеше..."; "Һис шикһеҙ, мин Алла ҡоло һәм уның хеҙмәтсеһе! Минең турала: "Алла ҡоло һәм Уның илсеһе" тип әйтегеҙ", - тигән. Ул үҙе өсөн тәҡүәлек һәм диндарлыҡ юлын һайлай һәм Аллаһы Тәғәләнең берлегенә ихлас инанған кешенең нисек йәшәргә, фекерләргә һәм ғәмәл ҡылырға тейеш икәнлеген башҡаларға күрһәтер өсөн ебәрелгән була.

Был кеше нисек йәшәгән? Үҙенең ғаиләһендә нindәй булған? Өйөндә үткәргән ваҡытын ул өс өлөшкә бүлгән: беренсе өлөшөн - ғибәҙәт ҡылыуға, икенсе өлөшөн - ғаиләһенә, өсөнсөһөн үҙенә бағышлаған. Ҡатыны Ғәйшәнән Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйҙә ни менән шөғөлләнеүе тураһында һорағас, ул шуларҙы һөйләгән: "Ул, һеҙҙең кеүек үк, аяҡ кейемен йүнәтте һәм үҙенең өҫ

# БӘЙҒӘМБӘРҘЕҢ БАЛАЛАРЫ



**Бәйғәмбәрҙәрҙең дә ғаиләләре булған. Ҡөрьәндә Аллаһы Тәғәлә һуңғы бәйғәмбәр Мөхәммәткә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай ти: "Һинән алда ла Беҙ бәйғәмбәрҙәр күндерҙек һәм уларға ҡатындар һәм балалар бирҙек" ("Рәғид"сүрәһе, 13.38)**

**Бөйөк Аллаһы Тәғәлә мосолмандарҙың туйыныу өсөн саралар табыу тырышлығын - Уға табыныу, ә ғаиләгә тотонолған сараларҙы игәнә килтереү, тип ҡабул итеп, уларға мәрхәмәт күрһәткән. Шуға ла кем ғаиләһен туйындырыу өсөн яуаплы, улар уны эске тойғолары менән Аллаһы Тәғәләгә табыныу итеп башҡарһын. Әммә мосолман бер ҡасан да матди байлыҡ туплауға ынтылмаҫ. Ул киләсәк тормошо һәм Аллаһ тарафынан уға һалынған бурыстарҙы тейешле кимәлдә үтәү тураһында онотмаҫҡа тейеш. Һәр кешегә ерҙә йәшәү өсөн сикле ваҡыт бирелгән һәм мосолман быны аңлап, үҙен әлеге һәм киләсәк тормошта тәьмин итергә бурыслы.**

### Ғаилә өсөн яуаплылыҡ

Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаилә ҡарау өсөн тырышлыҡтың табыныу итеп ҡабул ителеүен белеп, ғаиләһен ҡарау өсөн үҙе саралар тапҡан. Әбү Хөрәйрә (радиллаху анху) һүҙҙәре буйынса, Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Аллаһ юлында йәки ҡолдарҙы азат итеүгә, мохтаҗлыҡ кисереүселәргә һәм ғаиләгә тотонолған аҡсаларҙан ғаиләгә тотонолғаны өсөн күберәк файҙа аласаҡһың".

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) "Бану Надир" баҡсаһынан финик уңышын һатҡан һәм ул аҡсаның бер өлөшөн ғаилә сығымдары өсөн айырып алған, ҡалған өлөшөн ҡаҙнаға тапшырған. Ул үҙенең бөтә ғүмере буйы шулай эшләгән. Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дөйә һатып алған, улар көнө буйы Ухуд һәм әль-Джамаа үҙәндәрендә көтөүҙә йөрөгән. Был дөйәләрҙең һөтө менән бөтә ғаилә туҡланған, күршеләр, ҡунаҡтар һыйланған.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ҡатынына айырым бүлмә биргән. Шулай итеп, ул һәр ҡатынын торлаҡ менән тәьмин иткән. Ғаиләнең торлаҡ проблемаһын хәл итмәйенсә, ғаилә башлығы тыныслыҡ тапмаясағын һыҙыҡ өҫтөнә алып, Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тигән: "Кешене өс нәмә бәхетле яһай: "Аллаһтан ҡурҡҡан ҡатын, яҡшы йорт һәм яҡшы хәрәкәт итеү сараһы". Ә кешене бәхетһеҙ яһаусы әйберҙәргә килгәндә, улар насар ҡатын, насар йорт һәм насар хәрәкәт итеү сараһы".

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡатындарына һәм балаларына иғтибарлы, һиҙгер, рәхимле, шәфҡәтле булған.

### Балаларға һөйөү

Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларға Хоҙай тарафынан бирелгән бүләк тип ҡараған. Улы Ибраһим тыуғас, Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бик бәхетле булған. Ул улын күтәреп Ғәйшәгә (радиллаху анху) алып килгән һәм былай тигән: "Ҡара әле уға! Ул миңә нисек оҡшаған!"

Әнәс бин Мәлиҡ (радиллаху анху) һөйләгән: "Мин Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән дә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шәфҡәтлерәк кешене күргәнем булманы. Уның улы Ибраһим бер ауылға ҡунаҡҡа, һөт әсәһе янына киткәйне. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шул саҡта ла улын күрергә бара ине. Ул өйгә инә, улын ҡулына ала, уны үбә һәм кире ҡайтып китә ине".

Ғәҙәти көндәрҙә Бәйғәмбәрҙең бәләкәй ҡыҙы Фатима (радиллаху анху) атаһы янына инһә, ул тороп, ҡыҙының ҡулынан алып ҡосаҡлаған һәм үҙенең янына ултыртҡан. Фатима ла уға шундай уҡ һөйөү менән яуап ҡайтарған. Мөхәммәт ҡыҙын шул тиклем яратҡан, ҡайҙалыр китер булһа, иң аҙаҡтан уның менән хушлашҡан, кире ҡайтҡас, иң тәүҙә уның янына ингән.

Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең ейәндәрен дә яратҡан. Бара (радиллаху анху) һөйләгән: "Мин Бәйғәмбәрҙе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Хәсән ейәнен яурынына ултыртып: "Әй, Аллам! Мин уны яратам, Һин дә уны ярат!" - тигәнен күрҙем".

кейеменә ямауҙар һалды; Ул шулай уҡ ябай кеше ине: кейемдәр текте, һарыҡтар һауҙы һәм бөтә эштәрен дә үҙе башҡарҙы; Ул һәр ваҡыт үҙенең ҡатындарына ярҙам итергә тырышты. Ә намаҙ ваҡыты етһә, ул мәсеткә китә ине".

Ғаилә башлығы булараҡ, Уны ихтирам итәләр һәм яраталар. Мәккәлә уның Хәҙисә менән йәшәгән йорто була, унда уларҙың балалары Ҡасим, Абдулла, Зәйнәп, Руҡия, Өммөгөлсөм, Фатима донъяға килә. Фатихалы был йортта мөхәббәт һәм бәхет тантана итә. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларҙы ярата, улар ҙа шундай уҡ һөйөү менән яуап бирәләр: уны күреп ҡалыу менән ҡаршыһына йүгерәләр һәм Ул балаларҙың һәр береһе менән итәғәтле итеп һөйләшә, уларҙың эштәре һәм йомоштары тураһында һораша. Әгәр берәй мәсьәлә килеп тыуһа, ярҙам итә. Ул балалар менән шаярырға ярата. Бер саҡ шулай ниндәйҙер кеше улар янына килә лә Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) балаларын иркәләүе һәм үбеүенә ғәжәпләнеп, үҙҙәренең араһында былдай мөғәмәләнең ят булыуы хаҡында әйтә. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға былай тип яуаплай: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе миһырбанлыҡ һәм мөхәббәттән мәхрүм иткәс, мин ни ҡыла алам инде?".

Мәҙинәлә унын ҙур булмаған торлағы һәм уға төкәтмәһе булып, унда күп һанлы ғаиләһе йәшәй. Ауыр мәлдәрҙән һуң, бөтөн Ғәрәп ярымутрауы буйлап Ислам таралған осор етә. Шулай ҙа Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең баҫалҡы күркендә ҡала. Ул ябай тормош менән йәшәүен дауам итә, байлығы булмай һәм тормоштағы бөтә бәрәкәт кеше ҡарамағына бөйөк Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән, тип иҫәпләй. "Әгәр ҙә минең Ухуд тауы хәтлем аҡсам булһа, иң тәүҙә бурыстарымды түләп, аҙаҡ уларҙы өс көндә таратып бөтөрөр инем", - ти ул. Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йортонда ашарға бешерер өсөн усаҡ тоҡандырылмаған көндәр ҙә булған һәм Ул йыш ҡына ас килеш йоҡларға ятҡан. Бер көндө унын ярлы ғына торлағына диндарҙарҙың береһе Ғүмәр (радиаллаһу анху) килә һәм Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йәшәгән урынына ҡарашын ташлай. Унын алдында монһоу күренеш асыла. Мөйөштә хөрмә ағасы япраҡтары тултырылған түшәк ята. Өйҙәрендә бер йәймәгә етерлек кенә арпа оно була. Ул саҡта тотош Ғәрәп ярымутрауын үҙ ҡарамағында тотҡан кеше ана шулай йәшәй. Күргәндәре менән тетрәнгән Ғүмәр бик ҡайғыра. Ул түҙә алмай, күҙҙәренә йәш тула. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) быны күреп: "Ғүмәр, ни булды, нимә кәйефеңде боҙҙо? Һин илайһыңмы?" - тип һорай. Ғүмәр былай тип яуаплай: "О, Рәсүлуллаһ! Минә күҙ йәштәремде тыйыуы ауыр. Иран менән Рим байлыҡҡа батҡанда, Аллаһы Бәйғәмбәре көнөн һәм төндәрен үрелгән ҡаты балаҫта үткәрә". Ғүмәрҙе тынысландырыр өсөн Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай ти: "Рим менән Иран ерҙәге бәрәкәттәр менән ҡәнәғәт булып йәшәй. Беҙгә иһә мәңгелек тормош бәрәкәте лә етә".

Ғәйшә шулай тип һөйләгән: "Аллаһ илсеһе бер ваҡытта ла бер көн эсендә ике төрҙән артыҡ ризыҡ тәғәмләмәне. Әгәр ул ит ашаһа, был көндә башҡа бер ни ҙә ҡапманы; әгәр хөрмә һәм икмәк менән ризыҡланһа, был көн шулай уҡ башҡа нәмә ашаманы". Шул ваҡытта Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ аҫрауында булғандар хаҡында ҡайғыртты. Ә был йәһәттән сама белмәгәндәргә шундай нәсихәтен еткерер булды: "Кешеләр алдында үҙ бурыстарын оноткан ғаилә башлыҡтарына был гонаһ булыр ине".

Инаныуҙан йәндәргә таралған шатлыҡ һәм именлек айырыуса Унын ғаиләһе тормошонда, Унын үҙ йортонда асыҡ сағыла. Унын йорто Ул үҙен һәм яҡындарын мәңгелек тормошҡа әҙерләгән урын була. Ул кешеләргә ҡиммәттәр дәрәжәһен күрһәтеп бирә: фани донъя мәшәҡәттәре күктәрҙәге донъя әһәмиәтен ҡаплап торорға тейеш түгел. Бөтәһе лә гармонияла булырға тейеш. Аллаһы Тәғәлә унан башҡа бер кемгә лә тормоштоң ескә ептәренән мәғәнә һәм яуаплылыҡ асылын тукыу мөмкинлеге бирмәгән. Ул шул ҡәҙәре ышанысла була, унын һәр ваҡытта һәм һәр йәһәттән хаҡлығына шик тыумай, шуға күрә лә йөрәктәре асыҡ булғандар Унын Хәҡиҡәтен ләззәт һымаҡ ҡабул итә.

Ул балаларын йә яурынында, ҡайһы берҙә арҡаһында йөрөткән. Ҡайһы бер ваҡытта намаҙ уҡығанда ейәндәре унын арҡаһына менгән, ә ул уларға бер нәмә тип тә әйтмәгән. Әбү Хөрәйрә (радиллаху анху) былай тип һөйләгән: "Беҙ Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән төнгө намаҙҙы уҡый инек. Ул эйелгән һайын унын ейәндәре Хәсән менән Хөсәйен унын арҡаһына менә. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) башын күтәрә һәм иплә кенә уларҙы арҡаһынан төшөрә. Был күренеш намаҙ уҡып бөткәнсе дауам итте".

Әнәс бин Малик һөйләгән: "Бер тапҡыр һораным: "Эй, Аллаһ илсеһе! Һеҙ өйөгөҙҙә кемде нығыраҡ яратаһығыҙ? " Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Хәсән һәм Хөсәйенде, тип яуап бирҙе. Ҡайһы берҙә Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең ҡыҙы Фатимаға: "Минә минен улдарымды саҡыр", - тип әйтер ине. Хәсән менән Хөсәйен килгәс, уларҙы ҡосаҡлап яратыр һәм еҫкәр ине".

Бәйғәмбәр Хәсән менән Хөсәйенде генә түгел, башҡа ейәндәрен дә яратҡан. Әбү Катада (радиллаху анху) түбәндәгеләрҙе һөйләгән: "Бер тапҡыр Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡыҙы Зәйнәптең ҡыҙы Өмәмде яурынына ултыртып намаҙ уҡый ине. Аҫҡа эйелгәндә ҡыҙҙы ергә баҫтыра, кире тәҙәйгәндә тағы ла уны яурынына ултырта ине".

## Балалар тәрбиәләү

Бәйғәмбәр балалар намаҙ уҡыған саҡта яныльшып китһә, йомшаҡ ҡына итеп уларға иҫкәртеү яһаған. Ул балаларҙы намаҙ уҡытырға өйрәтеүҙе талап иткән, шулай уҡ уларҙы бер урында йоҡлатыуҙы тыйыр булған. Һәр бала ун йәштә биш тапҡыр намаҙ уҡырға тейеш булған, ата-әсәләрҙән балаға Ҡөрьәнде дөрөҫ уҡырға өйрәтеүгә иғтибар итеүен һораған. "Кем бала саҡтан Ҡөрьән уҡырға өйрәнә, унын бөтә тәненә Ҡөрьән үтеп инә", тигән бәйғәмбәр. Балаларҙы дин талап иткән ҡанундарға өйрәткәс, уларға был тормошта кәрәк буласаҡ белемдәргә өйрәтеү фарыҙ һаналған. Уларҙы берәй һөнәргә өйрәтеү талап ителгән. Шундай хәҙис билдәле: "Атай кеше балаһына яҡшы исем бирергә, ул балиғ булғас, өйләндерергә йәки кейәүгә бирергә һәм уны уҡырға һәм яҙырға өйрәтергә бурыслы".

Һәр мосолман үҙенең башҡарған ғәмәле өсөн яуаплылыҡ тойорға тейеш. Шул уҡ ваҡытта Аллаһ алдында яуап биргәндә үҙең өсөн генә түгел, ә балаларың һәм яҡындарың өсөн дә яуап тотосағыңды онотороға ярамай. Шуға ла һәр ғаилә башлығы үҙенең туғандарын һәм яҡындарын тәрлә насар йоғонтонан һаҡлау өсөн барыһын да эшләргә һәм уларҙы икенсе тормошҡа әҙерләргә тейеш.

Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) гел был турала борсолор булған. Мәҫәлән, "Әхзәб" сүрәһенең 33-сө аяты төшөрөлгәс, ул алты ай буйына иртәнге намаҙға китешләй ҡыҙы Фатиманың йортона килеп, уларҙы намаҙға уятҡан. Ул Фатиманы теге донъяла яуап бирәсәгебеҙҙе иҫкәртеп торған. Был турала Әли тарафынан һөйләнгән ҡыҙыҡлы тарих бар: "Фатима бәйғәмбәрҙең иң яратҡан ҡыҙы була. Унын ҡул тирмәнендә бойҙай тартыуҙан ҡулдары ярылып бөтә, һыу ташыуҙан муйынында яралар барлыҡҡа килә, өйҙә иҙән һеперуеҙән кейеме саңлана. Бер тапҡыр Бәйғәмбәргә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ирекһеҙ кешеләрҙе килтерәләр. Мин Фатимаға:

-Һин атайыңдан хужалыҡ эштәрен башҡарыу өсөн ярҙамсы һорай алмайһыңмы? - тинем.

Фатима атаһына китте, тик Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был кешеләр менән әңгәмәләшкәнен күреп, кире ҡайтты. Икенсе көнөнә Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе ҡыҙына килде лә, былай тип һораны:

-Ҡыҙым, һинең берәй нәмәгә мохтажлығың бармы әллә?

Фатима (радиллаху анху) бер нәмә лә әйтмәне. Мин һөйләшеүгә ҡыҫылдым:

-Эй, Аллаһ илсеһе! Мин барыһын да һөйләп бирә алам! -Һуңынан ҡыҙынын ни өсөн уға барыуын аңлатырға керештем:

-Фатиманың гел тирмән тартыуҙан ҡулдары ярылып бөткән, ауыр биҙрәләрҙән елкәләре яраланған. Һеҙгә ирекһеҙ кешеләрҙе килтереүҙәрен ишеткәс, мин уға Һеҙгә барып, уларҙың береһен ярҙамсы итеп һорарға кәңәш иттем. Быным менән беҙ унын тормошон еңеләйтер инек.

Был һүҙҙәрҙән һуң Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Фатимаға шулай тине:

-Эй, Фатима! Аллаһтан ҡурҡ, Унын ҡушыуын үтә һәм хужалыҡ эштәрен намыҫ менән башҡар. Йоҡларға ятыу менән 33 тапҡыр "собханаллаһ", 33 тапҡыр "әлхәмдүлилләһ" һәм 33 тапҡыр "Аллаһу Әкбәр" тип әйт. Шулай итеп, Аллаһы Тәғәләгә маҡтау һүҙҙәре йөҙгә етер. Былар һинә ялсыға ҡарағанда ла яҡшыраҡ ярҙам буласаҡ.

Фатима шулай тине:

-Мин Аллаһ һәм Унын илсеһе менән ҡәнәғәтмен!

Был һөйләшеүҙән һуң Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға ярҙамсы итеп бер кемде лә бирмәне".

**Морат КАЯ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Һеҙҙең хәлегеҙҙән килә торған ғәмәлдәр

**Әгәр маҡсаттарығыҙ аҙәми икән, һеҙ уларға өлгәшәсәкһегеҙ. Ғаләмдә үҙ ягыңа бороу мөмкин булған башҡа көс юҡ. Һеҙ Аллаһы Тәғәлә менән бер командала ҡалаһығыҙ, унын менән берлек усағы тоҡандыраһығыҙ, көндән-көн унын ҡайнарлығын тояһығыҙ.**

Ҡарағыҙ, Аллаһы Тәғәлә нимәгә һәләтле! Миллион йылдар элек таштар күҙәнәктәргә, тере йән эйәләренә әүерелгән. Ваҡыт үткәс, шул таштар кешегә әйләнгән, кеше хатта Айға осҡан. Әгәр шундай нәмәләрҙе атҡарып була икән, улар менән сағыштырғанда һеҙҙең маҡсаттарығыҙ - ябай ғына. Ныҡлы сәләмәтлек? Проблема юҡ. Банкта аҡса? Әле үк иҫәптә ята. Бәхетле ғаилә? Ниндәй ауырлыҡтар бар? Эштә уңыш? Әҙер. Андың тынысылығы? Бынан да ябай бер нәмә лә юҡ. Һайлауҙарҙа енеү, ниндәйҙер уйында оҫтарыу ниәте нисек? Әҙер, әҙер, әҙер... Тормошоғоҙ барлыҡ ауырлыҡтарҙан азат.

Мин Аллаһы Тәғәләнең һәләттәренә аптырауҙан туҡтай алмайым. Мин осон-осҡа саҡ ялғаған страховка агентының нисек итеп финанс уңышы бейеклегенә күтәрелеүен күрҙем. Мин аяғына ир-егеттәр "йығылған" илле йәшлек тол ҡатынды күрҙем. Мин урам малайынан уңышлы эшҡыуарға әйләнгән үсмерҙе беләм.

Әгәр үҙем оялсан, һаҡау малайҙан ысын яҙыусыға, бөтөн донъяға билдәле лектор һәм консультантҡа тиклем юл үтмәһәм, был китапты яҙа ла алмаҫ инем. Был эгоистик кәпәренеү түгел, ә үҙ командамдың капитаны хөрмәтенә лайыҡлы маҡтау.

**Ғалимдар яйлап Аллаһы Тәғәлә яғына сыға**

Ғалимдар йөҙәр йылдар ҡулланған төп күҙаллауҙар, парадигмалар яйлап үҙгәрә. Ньютондың иҫкергән ҡарашы Эйнштейндың яңы ҡарашы менән ҡыҫырыҡланды. Сағыштырып ҡарағанда, ул шулай күренер ине:

**Ньютон:** Донъя- өлөшсәләрҙән торған материя.

**Эйнштейн:** Донъя материя формаһында "ҡатырға" һәләтле энергетик полеларҙан тора.

**Ньютон:** Мейе, бөтөн тән буйынса таралған сигналдар кешелек аңынын үҙәге булып тора.

**Эйнштейн:** Кешелек аңы - тотош йыһанды тултырған Дөйөм Андың бер өлөшө.

**Ньютон:** Беҙҙең тәндәребеҙ ирекле, бойондороҡһоҙ.

**Эйнштейн:** Беҙҙең тәнебеҙ дөйөм тәндең бер өлөшө булып тора.

**Ньютон:** Тәбиғәт ҡанундары үҙгәрешһеҙ.

**Эйнштейн:** Кеше аңы тәбиғәт ҡанундарын үҙгәртергә һәләтле, сөнки кешеләр дөйөм тәҙәүҙә ҡатнаша.

**Ньютон:** Беҙ - рухиәтле булырға тырышҡан кешеләр.

**Эйнштейн:** Беҙ- кеше булырға тырышҡан рухиәтле йәндәр.

Әйҙәгеҙ, ғалимдарҙың прогресын алҡышлайыҡ. Бер заман улар ҙа беҙҙең кимәлгә етер, әммә был беҙҙең бер урында ҡатып ҡалырға тейешлекте аңлатмай...

**Роберт СТОУН.**



## 6 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Право на защиту"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
17.05 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.15 "Выборы-2012"
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жуков", 9-я серия
22.30 "Закрытые за рубежом"
23.35 "Познер"
00.35 Ночные новости
00.55 "Белый воротничок"
02.05, 03.05 "Путь в тысячу миль". Драма
03.00 Новости
04.10 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 237-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка",1-я серия. Сериал
17.50 "Хозяйка моей судьбы", 21-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "20 лет без любви", 1-я и 2-я серии
22.50 "Байки Митяя", 1-я серия
23.55 "Свидетели. "Они были первыми. Валентин Зорин". Док. фильм
00.50 "Вести+"
01.10 "Профилактика"
02.20 "Чак-2"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "ППС". "Детский сад", "Собственность". Сериал
21.25 "Кодекс чести-5", "Новый". Остросюжетный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.45 "Центр помощи "Анастасия"
02.35 "В зоне особого риска"
03.10 "Молодые и злые". Сериал
05.05 "2,5 человека". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 18.00 "Выборы-2012"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
